✓ Иғтибар! “Киске Өфө”гә яҙыла алмай ҡалған таныштарығыҙға әйтегеҙ: улар 17 февралгә тиклем яҙылһа, гәзитте марттан алдыра башлаясаҡ. Индексыбыҙ – 50665. 4 айға яҙылыу хаҡы – 158 һум 36 тин.

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға
Һатыуҙа хаҡы ирекле

27 ҒИНУАР-2 ФЕВРАЛЬ (ҺЫУЫҒАЙ-ШАҠАЙ) 2007 ЙЫЛ

№4 (214)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Гүзәл заттың холко...**
яҙғы елдәй йыш үҙгәрһә



6

**Мөжәүир хәҙрәт**



7

**Ил яҙмышы менән йәшәһә,**
ир менән ҡатын араһы ныҡ була



8-9

**Ирекле фекер**
ирektә тыуа



11

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ**
14-15


*”Башҡорттар ауыл-ауыл булып кейеҙ тирмәләрҙә йәшәй. Улар иртә яҙҙан башлап ҡара көҙгә саҡлы йәйләүҙәрҙә була, ҡымыҙ эсә, бөркөт һәм ҡарсыға сөйөп һунарға йөрөй, егетлектә ярыша, мәргәнлектә һынаша, йәйәләрҙән уҡтар ата. Улар бөтәһе лә йылҡы малын бик ярата, иҫәпһеҙ-һанһыҙ һыйыр малы тота, дала яҡтарында йәшәгәндәре дөйә лә аҫырай. Бынан тыш, урман башҡорттары кейекйәнлектәргә һунар итә һәм солоҡсолоҡ менән шөғөлләнә”.*

**Ф.Д. НЕФЕДОВ.**

## ИҒТИБАР:КОНКУРСТАР!

### "МИН БЕЛГӘН УРЫҪ"

Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығына гәзит уҡыусылар өсөн махсус конкурс иғлан итергә булғас, уйланыҡ-уйланыҡ та, конкурстың исемен **"Мин белгән урыҫ"** тип атаныҡ. Әлбиттә, уны "Белеш" йә "Ызнакум" тип тә алырға булыр ине. Әммә конкурс йөкмәткеһе киңерәк һәм ҡыҙыҡлыраҡ булһын өсөн ошо һүҙбәйләнештә туҡталдыҡ. Сөнки башҡорттар менән урыҫтарҙың үҙ-ара мөнәсәбәте белешлеккә һәм ызнакумлыҡҡа ғына ҡайтып ҡалмай. Белеш йә ызнакум булмаһа ла, үҙебеҙ ситтән ҡарап ҡына белгән, йә күршебеҙҙәйәшәгән, әммә ниндәйҙер сифаты йә ғәмәле буйынса һоҡландырғыс яҙмышлы урыҫтарҙы ла беләбеҙ. Шулай уҡ башҡорт ауылдарында йәшәп, холоҡтары беҙҙеңсәгә әүерелгән, беҙҙеңсә һөйләшкән, башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрен һыу кеүек "эскән" урыҫтарҙың барлығына ла шаһитбыҙ. Конкурсҡа урыҫтар тураһында, йә улар менән мөнәсәбәттәге ҡыҙыҡлы йә ғибрәтле хәл-ваҡиғалар хаҡында ла яҙып ебәрә алаһығыҙ. Конкурсҡа килгән урыҫтар хаҡындағы лаҡаптарҙан да, ҡыҫҡа хикәйәләрҙән дә баш тартмайбыҙ. Иң мөһиме, яҙғандарығыҙ фәһемле, зауыҡлы һәм ҡыҙыҡ булһын, хөрмәтле дуҫтар!

Конкурс һынлы конкурс иғлан иткәс, еңеүселәрҙе көткән бүләктәр хаҡында ла яҙып үтәбеҙ:

**1-се урынға - микротулҡынлы мейес.**
**2-се урынға - саң һурҙырғыс.**
**3-сө урынға - кеҫә телефоны.**

**Конкурсҡа йомғаҡ 2007 йылдың аҙағында яһаласаҡ.**

### “АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО”

Кеше был донъяға йәшәр өсөн генә тыумайҙыр, күрәһең. Уны тыуғандан алып дауалай башлайҙар. Дауалауҙың мең төрө бар. Әммә дауаласылар араһында Гали Матье тигән француз табибының башы үтә лә йоморо булған, тиҙәр. Бәй, шулай булмаһа, башҡаларҙың башы етмәгән дауа уйлап тапмаҫ ине бит. Ул ауырыуҙарҙы ... көлдөрөп дауалаған. Эйе, ып-ысын. Көлөүҙең дауа икәнен үҙегеҙ ҙә инҡар итергә ҡыймаҫһығыҙ, моғайын. Һүҙ бит, Туҡайҙың Шүрәлеһе кеүек, ҡытыҡлап көлдөрөү тураһында түгел, ә аң аша күңелде, т.е. йәнде ҡытыҡлап көлдөрәү хаҡында. Гәзитебеҙҙең "Алдар менән Ерәнсә ҡоро"нда беҙ шул француз табибының ысулын ҡулланмаҡсы булғайныҡ. Аллаға шөкөр, рубрика йәшәп китте. Дауаһы тейәмелер-юҡмылыр, был рубрикаға хаттар былай йыш килә.

Бер йыл арауығында ошо рубрикала баҫылған мәҙәктәрҙән **Нурия Ҡунысбаева** (Ейәнсура районы) менән **Азамат Багаувтың** (Әбйәлил районы) яҙғандарын билдәләп китергә һәм уларға гәзиттең махсус бүләген тапшырырға ҡарар иттек. Башҡаларынан айырмалы, был конкурсыбыҙ гәзитебеҙ битендә мәңге дауам итәсәк, тик беҙ уҡыусыларыбыҙҙы дәртләндереү, ҡулдарына ручка, ҡәләм алырға мәжбүр итеү маҡсатында ҡорҙағы мәҙәктәргә йылына бер тапҡыр йомғаҡ яһап, иң зәһәр көлкө тоҡсайҙарына бүләктәр тапшырып торорға ниәтләгәйнек.

**Быйыл йыл аҙағында юморға битараф булмаған авторҙарыбыҙҙы тағы ла билдәләп үтербеҙ. Беренсе урынға дәғүә итеүсегә - МИКРОТУЛҠЫНЛЫ МЕЙЕС, икенсегә - КЕҪӘ ТЕЛЕФОНЫ, өсөнсөгә МАГНИТОЛА бирәсәкбеҙ. Рәхим итегеҙ Алдар менән Ерәнсә ҡорона!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

### ХИКӘЙӘ! ХИКӘЙӘ!

**"Сәғит Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсы"** дауам итә. Хәтерегеҙҙә булһа, 2005 йылдың аҙағында беҙ был конкурстың тәүге турына йомғаҡ яһап, еңеүселәрҙе лә билдәләгәйнек. Унда Өфө ҡалаһынан Мирсәйет Ҡылысов, Сибай ҡалаһынан Хәлил Һөйөндөков, Әбйәлил районынан Иҙрис Ноғоманов еңеүсе булғайны. Конкурс дауам итә.

Икенсе турға йомғаҡ ошо йылдың аҙағында яһаласаҡ. Унда 2006-2007 йылдарҙа гәзитебеҙҙә донъя күргән авторҙарҙың әҫәрҙәре ҡараласаҡ. Икенсе тур өсөн дәртләндереү саралары хаҡында ла хәбәр итәбеҙ:

**1-се урынға - цифрлы фотоаппарат;**
**2-се урынға - DVD-плеер;**
**3-сө урынға - кеҫә телефоны.**

**Хикәйәләрегеҙҙе тиҙ арала беҙгә ебәрергә ашығығыҙ.**

О-ҺО-ҺО!

# БҮЛӘК АЛЫУ ҘА,
## бүләк биреү ҙә ҡыуаныс

**"Әнә лә бүләк, дөйә лә бүләк" тигәндәй, көтөлмәгән бүләк алыу һәр ваҡыт ыңғай хис-тойғо уята күңелдә. Бүләк биреүсенең иғтибары, илтифаты, айырым мөнәсәбәте ҡыуандыра.**

Бүләк биреү бүләкләүсенең үҙе өсөн бигерәк тә ҡыуаныс ул. Быны беҙ үҙебеҙҙән беләбеҙ. Әлбиттә, педагогтар әйтеүенсә, бала тәрбиәләү мәсьәләһендә "Матур уҡы - бүләкләйем" тигән алым хупланмай. Әммә был беҙгә ҡағылмайҙыр, һәм шуға ла ул алымды рәхәтләнеп ҡулланабыҙ: гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы башланғас, уҡыусыларыбыҙға "Яҙылһағыҙ, бүләкләйбеҙ" тип вәғәҙә бирәбеҙ. Гәзиткә яҙылыу тураһында квитанциялар килеүе, берҙән, һөйөндөрә ул, икенсенән, бер аҙ ҡыйынһыныу ҙа кисерелә. Сөнки... Беҙ бит күңелсәк, йомарт, киң күңелле халыҡ: бар квитанция хужаларын да бүләкләге килә, тик, үҙегеҙ аңлап тораһығыҙ, бындай мөмкинселеккә әйә түгелбеҙ. Ә шулай ҙа барлыҡ гәзит уҡыусыларыбыҙға үҙебеҙҙең иң изге рәхмәт һүҙебеҙҙе, иң изге теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ - "Киске Өфө" менән бергә ҡалып, отолманығыҙ. Бигерәк тә гәзитебеҙҙе иң күп алдырыусы Баймаҡ, Учалы, Әбйәлил, Бөрйән, Хәйбулла, Ғафури, Күгәрсен райондарындағы, Өфө, Сибай ҡалаларындағы уҡыусыларыбыҙға рәхмәтлебеҙ - яҡшы матбуғат һүҙен һанлаусы уҡыусылар тап ошо төбәктәрҙә йәшәй.

"Отош уйыны оптимистар шөғөлө" тиҙәр, гәзиткә яҙылыу тураһында квитанцияларын ебәреп, ниндәйҙер бүләк отоуға өмөтләнгән иң оптимист уҡыусыларыбыҙҙың барыһына ла **"БАШҠОРТСА ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"** барып етер.

✓ **Ә махсус бүләктәребеҙгә иһә түбәндәге уҡыусыларыбыҙ лайыҡ булды:**

**ТӨҪЛӨ ТЕЛЕВИЗОР** - Баймаҡ районы Үрге Таулыҡай ауылынан **Фәүзиә Һағынбаева;**

**КЕҪӘ ТЕЛЕФОНЫ** - Учалы районы Муса ауылынан **Рафаэль Лотфуллин;**

**ЭЛЕКТР СӘЙНҮГЕ ҺӘМ ҮТЕК** - Баймаҡ районынан **Зәйнулла Буранбаев** (Үрге Яйыҡбай ауылы), **Миңнегөл Усманова** (Иҫке Сибай), Әбйәлил районынан **Нәғимйән Нурғәлин** (Асҡар), Учалы районынан **Бәпәнә Ғибәҙәтова** (Рәсүл), Бөрйән районынан **Сәләх Әхмәтов** (Иҫке Собханғол), **Мәһәҙей Халиҡов** (Байназар), Ғафури районынан **Рәшиҙә Таһирова** (Ташбүкән), Стәрлебаш районынан **Зәминә Сәғитова** (Ҡабаҡуш), Ейәнсура районынан **Рәшиҙә Хәсәнова** (Ибрай), Ишембай районынан **Фәниә Йәмилева** (Уразбай), Әлшәй районынан **Мөнир Шәйхетдинов** (Ҡыпсаҡ-Асҡар), Күгәрсен районынан **Сәғиҙулла Булатов** (Нуҡай), Өфөнән **Рәйсә Дильманова**.

✓ **"Киске Өфө" гәзитен таратыуҙа айырыуса тырышлыҡ күрһәткән почтальондар ҙа беҙҙең иҫтәлекле бүләктәргә лайыҡ булды:**

**ТӨҪЛӨ ТЕЛЕВИЗОР** - Учалы ҡала һәм район элемтә бүлексәһе;

**КЕҪӘ ТЕЛЕФОНЫ** - Баймаҡ ҡала һәм район элемтә бүлексәһе;

**ЭЛЕКТР СӘЙНҮГЕ ҺӘМ ҮТЕК** - Баймаҡ ҡалаһынан **Айгөл Мөстәкимова, Гөлйөҙөм Шәрипова,** Әбйәлил районынан - **Әлфиә Булатова, Зөлфиә Латипова,** Учалы районынан - **Нәжибә Ибраһимова,** Ғафури районынан - **Ләлә Зәйнуллина,** Күгәрсен районынан - **Фәрзәнә Айытова,** Бөрйән районынан - **Мәрғиҙә Ишҡыуатова, Вәсимә Усманова,** Хәйбулла районынан **Гүзәл Сыңғыҙова.**

✓ **Махсус бүләктәребеҙ:**

Баймаҡ районы үҙәкләштерелгән китапханалар селтәре коллективына (директоры Луиза Дәүләтшина) һәм БДУ-ның Учалы факультеты иҡтисад бүлеге уҡытыусыларына һәм студенттарына (деканы Зилә Рәхмәтуллина) гәзитебеҙҙе таратыуҙа ярҙам иткәндәре өсөн рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ һәм уларҙы **МАГНИТОЛА** менән бүләкләйбеҙ.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



**Өфө ҡалаһының иң йәш башҡорт теле уҡытыусылары – "Киске Өфө" менән һәр саҡ бергә**

БИТАРАФ ТҮГЕЛДӘР

**Беҙҙең теләк - гәзит менән уҡыусы араһында ихлас диалог булдырыу. Шуға ла гәзит уҡыусыларыбыҙҙан бәләкәй генә сәләм, теләк-фекерҙәре яҙылған хат киҫәге килһә лә, беҙгә шатлыҡ. Сөнки улар бик ихлас яҙыла. Маҡтаһалар ҙа, тәнҡитләһәләр ҡабул итәбеҙ, фәһем итеп һеңдерәбеҙ. Түбәндә хаттарҙан өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ:**

# Гәзитте уҡып...
## тыныслыҡ табам

"Киске Өфө"нө сыға башлағандан бирле алдырып уҡыйым. Үҙем уҡыйым, үҙем ҡыуанам: әл дә ошо баҫма бар әле, тим. Ирем дә, үҙем дә Башҡортостаныбыҙ, башҡорт халҡы яҙмышына битараф булмаған кешеләр. Күп һорауҙарыбыҙға яуапты "Киске Өфө"лә табабыҙ, сығыштарҙы ҡыҙыҡһынып уҡыйбыҙ, матур һығымталарға ҡыуанабыҙ. "Әйе, шулай шул!", "Ҡалай дөрөҫ яҙылған!", "Ҡара, мин дә шулай уйлағайным бит!" тип һығымталар яһап, ҡысҡырып уҡ ебәрәм мин үҙем гәзитте уҡыған саҡта. Ҡул аҫтында телефон булмағас, шул һүҙҙәрҙе һеҙгә еткереү форсаты ғына юҡ. Шәп гәзит сығараһығыҙ, афариндар!

**Гөлдәр ИСҠУЖИНА,**
Өфө районы Йоматау ҡасабаһы".

"Мин был гәзитте өсөнсө йыл уҡыйым, артабан да унан айырылмам, тип уйлайым. 80-90-сы йылдарҙа "АиФ"ты яратып уҡыныҡ. Һуңғы йылдарҙа хаҡы бик күтәрелеү сәбәпле, уны алдыра алмай башлағайныҡ, күңелдәге бушлыҡты ни менән тултырырға белмәй йөрөгәндә, "Киске Өфө" килеп сыҡты. Гәзиттәге әхләҡи, тәрбиә темаһына яҙылған сығыштар бик оҡшай. Халҡыбыҙҙың рухын күтәреүҙә "Киске Өфө"нөң роле баһалап бөткөһөҙ ул.

**Миңнебулат МУЛЛАҒОЛОВ,**
Ишембай районы Һайран ауылы".

"Зыялылар рухы тулы унда,
Һәр кем унда зиһен, аң табыр.
"Киске Өфө" - киләсәккә күпер,
Халҡым күңелендә аҡтамыр.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА,**
Мәләүез ҡалаһы".

"Бик яратып уҡыйым "Киске Өфө"нө. Милләт өсөн борсолоусы, уны һаҡларға, абруйын күтәрергә ынтылыусы, бының өсөн булған мөмкинлектәрҙе файҙаланырға, булмағанын табырға өндәүсе матбуғат баҫмаһы бит ул "Киске Өфө". Тик ошо баҫма ғына башҡорт донъяһындағы хәлдәрҙең айышына төшөндөрә, рухыбыҙҙы күтәрә, киләсәккә өмөт уята, күркәм мөнәсәбәттәргә өйрәтә, арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең йәшәү өлгөһө, көнитмеше, фәһемле фекерҙәре менән таныштыра. Мең-мең рәхмәт һеҙгә!

**Миңлегөл УСМАНОВА,**
Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылы".

"Гәзитегеҙҙе көтөп алып, бер тынала уҡып сығам. Ни өсөндөр, "Киске Өфө"нө уҡыһам, йәнем тыныслана. Ҡөрьән китабынан уҡылған доға кеүек тәьҫир итә унда яҙылғандар.

**Светлана ҒӘЛИӘХМӘТОВА,**
Ғафури районы".

"Киске Өфө"лә уҡылған һәр мәҡәлә йә күңелдә дауыл уята, йә ниндәйҙер аҡылды иҫкә төшөрә, үткәндәге хәтирәләр ҙә ҡалҡып килеп сыға. Матбуғат һүҙе шулай булырға тейештер ҙә инде ул: һәр кем йөрәгендә шаңдау тыуҙырмаһа, уның ни кәрәге лә, ниңә хөкүмәт ундай баҫманы сығарыуға аҡса әрәм итергә тейеш? Ҡыҙғаныска ҡаршы, хәҙер шундай баҫмалар күбәйҙе бит. Асып ҡарайһың да, күҙгә элер, иғтибарҙы йәлеп итер мәғлүмәт тапмай, ябып ҡуяһың. Ә "Киске Өфө"нө мин һағынып көтөп торам, аҙнаһына бер килеп ингән иң яҡын әхирәтем, иң изге дауалаусым кеүек ул минең. Ҡайһы саҡта ундағы фекерҙәргә үҙем дә ҡушылып китәм дә, редакцияға хат яҙып һалам. Ҡайһы саҡта әхирәттәремә шалтыратып, "Киске Өфө"лә баҫылған ниндәйҙер сығыш тураһында оҙон-оҙаҡ итеп фекер алышабыҙ. Минең тормошомдың айырылғыһыҙ бер өлөшө ул был баҫма...

**Айгөл АХУНОВА,**
Өфө ҡалаһы".

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Нидерландтарҙың VDL концерны вице-президенты Маринус Фармелен менән осрашты. Осрашыуҙа яңы "VDL - НефАЗ" автобустары етештереү һәм концерн менән эшлекле бәйләнештәрҙе үҫтереү мәсьәләләре тикшерелде.

✓ Башҡортостанда эш сәфәре менән Францияның Рәсәйҙәге илселеге советнигы Морис Россен булып китте. Уның сәфәренең маҡсаты - республика агросәнәғәт комплексының тәжрибәһен өйрәнеү, киләсәктә ике яҡ өсөн дә файҙалы хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөү.

✓ Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сираттағы сессияһында бер нисә мөһим мәсьәлә ҡаралды.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты район һәм ҡала хакимиәттәре башлыҡтары менән үткәрелгән кәңәшмәлә көн үҙәгенә ата-әсәһеҙ ҡалған етем балаларҙы урынлаштырыу мәсьәләһен ҡуйҙы. "Был бөгөнгө көндөң иң ҡырҡыу мәсьәләләренең береһенә әйләнде", тип билдәләне Мортаза Ғөбәйҙулла улы. Бөгөн республикала 18918 етем бала иҫәпләнә, уларҙың һаны йылдан-йыл арта бара.

✓ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә Төҙөкләндереү йылын һәм Башҡортостан менән Рәсәй берҙәмлегенең 450 йыллығын үткәреү буйынса ике ойоштороу комитетының берлектәге ултырышы үтте. Премьер-министр Рафаэль Байдәүләтов Төҙөкләндереү йылы йомғаҡтары тураһында һөйләне. Билдәләнеүенсә, йыл саралары үткәреүгә 15,4 миллиард һум аҡса тотонолған. Былтыр республикала 1705,7 мең квадрат метр майҙанда 21,1 мең фатир төҙөлгән.

✓ Республикала Рәсәй нефть һәм газ сәнәғәтселәренең VII конгресына әҙерлек башланды. Ойоштороу комитетының тәүге кәңәшмәһе булды ла инде. Быйыл экспозицияны Спорт һарайына урынлаштырасаҡтар. Форум 22-25 майҙа үтәсәк. Унда ҡатнашыу өсөн Рәсәй төбәктәренән, Германия, Япония, Украина, Франция, Швейцария предприятиеларынан 111 ғариза килгән.

✓ Тәтешле районында башҡорт телендә "Аҡ тирмә" тигән район гәзите сығарыла башлаған.

✓ 26-29 ғинуарҙа БР бильярд спорты федерацияһы һәм БР Физик культура, спорт һәм туризм министрлығы бильярд буйынса БР президенты кубогына турнир ойоштора.

***✓ Нисек кенә булмаһын, улар оҙаҡ уйлап, кәңәшләшеп, бәхәсләшеп арығандан һуң машиналарына урынлаштырылған махсус сигналдарҙан һәм дәүләт флагы төшөрөлгән номерҙарҙан арынырға килеште.***

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ДЕПУТАТТАР ҺАЙЛАУҘАРҒА ӘҘЕРЛӘНӘ:

## махсус номерҙарҙан баш тарта һәм Думала тәртип урынлаштырырға самалай

**Ҡыҙыҡ инде был донъя, йәмәғәт. Бөтәбеҙ ҙә кеше кеүек. Йәғни, ир менән ҡатындың ҡауышыуынан яралған йән эйәләре. Ике аяҡ, ике ҡул, муйынға ултыртылған бер йоморо баш. Кемдер йыуаныраҡ, кемдер ябығыраҡ, кемдер бейегерәк, ә кемдер тәпәшерәк булыуға ҡарамаҫтан, барыбер, бөтәбеҙ ҙә кешеләрбеҙ.**

Тәбиғәттең бөйөк ҡеҙрәте менән ир һәм ҡатынға бүленгәнбеҙ. Быныһы ыңғай күренеш. Ысынлап та, бер бөтөн булһаҡ, йәшәүҙең мәғәнәһе һәм ҡыҙығы ла ҡалмаҫ ине бит. Әле иһә икенсе яртыбыҙҙы эҙләп мәж килешәбеҙ. Шул уҡ тәбиғәт беҙҙең тәндәребеҙҙе, сәстәребеҙҙе төрлө төҫтәргә буяған. Быныһы инде донъя бер төҫтә генә булмаһын, тигәндән киләләр. Уныһы менән бигүк килешеп бөтмәһәм дә, беҙҙе Кеше итҡән илаһи көстө аңлайым. Ул бит ҡара, һары, ҡыҙыл һәм аҡ тәнлеләрҙе бүлдырғанда тән тиреһенең төҫө үҙ-ара ыҙғышҡа килтерер, тип уйламаған да. Был кешеләргә йәшәүе күңеллерәк булһын, тип кенә фекер йөрөткәндер.

Аллаһы Тәғәлә иһә телебеҙҙе бутаған - былар бер-береһе менән аңлашып-ярашып йәшәмәһен, үҙҙәрен бөйөк итеп тоймаһын, күккә олғашып торған диуар төҙөмәһен, типтер инде. Теләһәк, уныһын да хәл итәбеҙ беҙ - һүҙ байлығы етмәһә, ҡулдарҙы болғап, ымлап, баш һелкеп булһа ла аңлашабыҙ. Һәр хәлдә, тел айырымлығы үтә ҡамасауламай беҙгә.

Кеше бөтә нәмәне үҙгәртеп ҡороу, туктауһыҙ яңыртыу һәм яңырыу теләге өсөн дә кеше тип һанала бит инде. Ул тәбиғәт һәм Алла тарафынан бирелгән бүленеш менән генә ҡәнәғәт була алмай. Йәмғиәт ҡоролошо ҡатмарланған һайын кешеләр үҙҙәре теләп яңынан-яңы бүленештәр уйлап сығарған. Байҙар һәм ярлылар, феодалдар һәм вассалдар, хужалар һәм ҡолдар, эшселәр, крәҫтиәндәр һәм капиталистар... Бер-береһе менән идара итергә, үҙен башкаларҙан өҫтөн ҡуйырға, башкалар көсө менән табыш алырға, башкаларҙы иҙергә, егергә, әйҙүкләргә, ҡыуырға. Кеше йәмғиәте бүленгән дә бүленгән. Тәүҙә кеше көсө, аҡылы менән ҡояш аҫтында йылыраҡ, ә тимәк, табышлыраҡ урынды биләһә, артабан иһә йә байлығы, йә үҙе үк уйлап сығарған дәрәжәһе, статусы, вазифаһы уға ошо урында нығынырға, шәбәйергә мөмкинлек биргән. Бынан һуң инде ундайҙар үҙенә яңынан-яңы өҫтөнлөктәр, мәртәбәле исемдәр, яңғырауыҡлы вазифалар булдырған. Тәмле ашап, татлы эсеү өсөн генә түгел, башкаларҙың яҙмышын хәл итеү, һуғыш иғлан итеү һәм йылғаларға яңы юл ярыу кеүек эштәрҙе башҡарыу, йәғни ил, дәүләт, йәмғиәт, хатта бөтә донъя менән идаралыҡ итеү өсөн тырышҡан ул. Шундай оло, яуаплы эштәрҙе башкарған кешеләр, һис шикһеҙ, күпселектән нимәһе менәндер айырылып торорға тейештер бит.

Борондан килә был йола. Башкалар һарыҡ тиреһен ябынғанда, былар арыҫландыҡы менән ҡаплана торған булғандар. Күпселек киндер ыштан кейгәндә, былар ебәкбәрхәткә генә төрөнгән. Алыҫтан күренеп, дәрәжәләрен белдереп торор өсөн күп нәмәгә эйә булырға ынтылған улар. Ундайҙарҙы кейемһалымһыҙ ҡына, әйтәйек, мунсала күрһәң, башка кешеләрҙән бер нәмәһе менән дә айырылмай кеүек. Шул уҡ ике аяҡ, ике ҡул, муйынға ултыртылған йоморо баш. Әммә ҡиммәтле кейемдәр кейеп, түштәренә нишандарын таҡып алһалар, атлап йөрөүҙәре, ҡараштары, көүҙәләрен тотоуҙары үҙгәрә, һөйләшеүҙәре бөтөнләй башка булып китә. Кемдәр хаҡында һүҙ алып барғанымды аңлағанһығыҙҙыр инде. Ул ҡатлам йәмғиәттең ҙур өлөшөн биләмәй. Ундайҙар күп булырға ла тейеш түгелдер.

> ***Дәүләт Думаһы депутаттары иһә үткән аҙнала тәртип мәсьәләһен күтәреп сыҡты. Дөйөм ил кимәлендә түгел әлегә. Эште Думанан башларға кәрәк, тип уйланы шикелле улар. Думаның мандат һәм депутат этикаһы мәсьәләләре комиссияһы рәйесе Геннадий Райков әҙерләгән Депутат этикаһы кодексы проектында тәртип боҙған депутаттарҙы яуаплылыҡҡа тарттырыу ҡаралған. Ғөмүмән, һуңғы өс йыл эсендә генә урындарҙан депутаттарҙың тәртипһеҙлегенә зарланған 500-ләп ялыу килгән.***

Бөтәһенә лә ҡағылып тормайыҡ. Бөгөнгә депутаттарҙы ғына алайыҡ. "Халыҡ хеҙмәтселәрен", тимәк. Алыҫ барырға ла кәрәкмәй. Рәсәй Федераль Йыйылышы депутаттарына ғына иғтибар итәйек. Һан яғынан Рәсәй дәүләте масштабында күп түгел улар, Федерация Советында 180-ләп кеше. Дәүләт Думаһында ни бары 450 кеше генә. Йәмғеһе - 530. Рәсәй өсөн сүп кенә. Әммә улар сүп түгел, ә һәр береһе шәхес. Һәр береһе башка халыҡтан нимәһелер менән айырылып тора. Юғиһә, уларҙы ошо яуаплы, абруйлы, мәртәбәле эшкә һайлап та ҡуймаҫтар ине. Улар бит көн һайын илебеҙҙең, тотош Ер шарының яҙмышын хәл итҡән законлар ҡабул итә. Тимәк, төрлө өҫтөнлөктәр һәм ташламалар менән файҙаланырға тейеш.

Советтар Союзындағы депутаттарҙың тәжрибәһен өйрәнәйек, булмаһа. Ул ваҡытта ла СССР Юғары советы депутаты итеп һайланғандар өҫтөнлөктәргә эйә булмаған түгел, булған - сиратһыҙ автомобиль һатып алыу, торлаҡҡа эйә булыу, юл йөрөгәндә транспортка билет бушлай алыу һ.б. Бынан тыш, депутатарға төрлө ябыҡ магазиндарҙан (ябай кешеләр өсөн ябыҡ, әлбиттә) ҡыҙыл һәм ҡара ыуылдырыҡ, ҡыйбатлы балыҡ, сит ил кейем-һалымы һәм башка бик күп ул ваҡытта ябай магазиндарҙа булмаған нәмәләрҙе һатып алыу мөмкинлеге бирелгән. Ул заманалар үтте. Борис Ельцин власка килгәс, иң тәүҙә өҫтөнлөктәрҙән арыныуҙы төп маҡсат итеп ҡуйҙы. Шул арала илдә баҙар иктисады тамыр йәйә башланы, ҡыҙыл ыуылдырыкты (аҡсаң булһа, әлбиттә) теләһә ниндәй кибеттә алырға мөмкинлек тыуҙы. Әммә өҫтөнлөктәрҙән баш тартҡы килмәй бит. Эш хаҡын мул итеп ҡуйырға мөмкин. Тик был ғына етмәй. Депутаттар оҙаҡ уйлап торманы - үҙ-үҙҙәренә юлда ҡаршылыҡһыҙ юғары тиҙлектә йөрөүҙе "бүләк" итте. Тәү ҡарашка, был, ысынлап та, кәрәк нәмә кеүек. Дәүләт эше менән мәшғүл кешегә "тығын"дарҙа тороу, светофорҙар алдында "баш эйеү" яраған эш түгел. "Халыҡ хеҙмәтсе"ләренең ҡиммәтле сит ил машиналарына төрлө "ялпылдаҡ"тар, махсус (дәүләт флагы һүрәтләнгән) номерҙар ҡуйылды. Башкалар сәғәттәр буйы урамда торғанда улар ялпылдап китеп барҙылар.

Ниһайәт, депутаттар әҙ генә булһа ла үҙҙәре хеҙмәт итҡән халыҡ менән бер таҡтаға баҫырға ниәтләне, шикелле. Маҡсаттары билдәле: быйыл декабрҙә Дәүләт Думаһына һайлауҙар була, йәғни халыҡҡа сығырға, уларҙың тауышын йыйырға кәрәк. Ә быяың өсөн ҡайһы бер өҫтөнлөктәрҙән ситләшергә лә мөмкин. Ваҡытлыса ғына. Яңынан депутат итеп һайланғансы тиклем. Нисек кенә булмаһын, улар оҙаҡ уйлап, кәңәшләшеп, бәхәсләшеп арығандан һуң машиналарына урынлаштырылған махсус сигналдарҙан һәм дәүләт флагы төшөрөлгән номерҙарҙан арынырға килеште. Ә үткән аҙнала иһә был закон Федерация Советында ҡаралды. "Ҡаралды" тип әйтеү генә әҙ, был закон проекты сенаторҙар араһында оло бәхәс тыуҙырҙы. Бөтәһе лә халыҡ менән тигеҙләшергә риза түгел икән дә! Федерация Советы ағзаларына был мәсьәләне хәл итеү өсөн хатта ҡабат-ҡабат тауыш бирергә тура килде. Ә ҡайһы бер йоморо башлы сенаторҙар асыҡтанасыҡ быға ҡаршы сыҡты. Дөрөҫөн генә әйткәндә, ул депутаттарҙың фекере менән мин дә ризалашам. Улар өсөн ҡайһы бер өҫтөнлөктәр һаҡланырға тейеш. Йәғни, уларҙың машиналарын ысынлап та ниндәйҙер берәй билдә менән тамғалау мотлаҡ. Депутат килгәнлеге алыҫтан уҡ күренеп торһон. Машиналарын ҡыҙылһары төҫкә буярға мөмкин. Йәки, уларҙы Рәсәй автопромының автомобилдәренә күсереп ултыртырға була. Бәлки шул саҡта улар үҙҙәрен халыҡ менән тигеҙ тойор.

Дәүләт Думаһы депутаттары иһә үткән аҙнала тәртип мәсьәләһен күтәреп сыҡты. Дөйөм ил кимәлендә түгел әлегә. Эште Думанан башларға кәрәк, тип уйланы шикелле улар. Думаның мандат һәм депутат этикаһы мәсьәләләре комиссияһы рәйесе Геннадий Райков әҙерләгән Депутат этикаһы кодексы проектында тәртип боҙған депутаттарҙы яуаплылыҡҡа тарттырыу ҡаралған. Ғөмүмән, һуңғы өс йыл эсендә генә урындарҙан депутаттарҙың тәртипһеҙлегенә зарланған 500-ләп ялыу килгән. "Халыҡ хеҙмәтселәре"нең һаны 450 икәнлеген иҫкә төшөрһәк, ирекһеҙҙән, дәүләт башына кемде һайлап ултыртып ҡуйғанбыҙ икән, тигән уй килә. Депутаттарыбыҙ кеше алдында һуғыша, бер-береһенең сәсен йолҡолай, һәм бөтөнләй ултырыштарға йөрөмәй. Күрәһең, башка мөһимерәк эштәре барҙыр инде, тип фаразларға ҡала. Шуға ла был кодексҡа ярашлы, Думаның пленар ултырыштарын инкар итеүселәргә штраф һалынасаҡ. Ә әрләшкән һәм мыҡҡыллы сығыштары менән кешеләрҙең намыҫына тейгән депутаттар иһә сығыш яһау мөмкинлегенән мәхрүм ителәсәк.

Бик кәрәк документ. Юғиһә, депутаттарыбыҙ Думаға кем тарафынан һәм ни өсөн һайланғанын онотоп бара, шикелле. Тик... үҙҙәре ултырған ботаҡҡа балта сабырға уларҙың башы шаҡмаҡ түгел дә баһа. Улар ҙа бит беҙҙең кеүек үк ике аяҡлы, ике ҡуллы, йоморо башлылар. Кешеләр, тимәк. Тик ҡайһы берҙәре кеше икәнен онотоп та ҡуйғылай шул.

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Ошо көндәрҙә Һарытауҙа Рәсәй мөфтөйҙәре советы ултырышы булып үтте. Унда Рәсәй мөфтөйҙәр советы ойошмаһының етәкселәрен яңынан һайлау булған. Башҡортостан Диниә назараты идаралығы рәйесе Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллин үҙ вазифаһында ҡалдырылған һәм тағы өс йылға бер тауыштан Рәсәй мөфтөйҙәр советы рәйестәше итеп һайланған.

✓1 февралдә Рәсәй Президенты Владимир Путин алтынсы тапҡыр Рәсәй һәм сит ил матбуғат саралары вәкилдәре менән осрашасаҡ.

✓Башҡорт дәүләт университеты Сибай институтының яңы уҡыу корпусы бинаһында бөйөк башҡорт мәғрифәтсеһе Мифтахетдин Аҡмуллаға барельеф асылған. Аҡмуллаының әлегә ундай һынланыш алғаны юҡ ине әле - барельефтың бейеклеге дүрт метрға етә. Авторы - Ишморат Дәүләтбаев.

✓15-18 майҙа баш ҡаланың Нефтселәр мәҙәниәт һарайында "Шифахана - 2007" Бөтә Рәсәй форумы уҙғарыла.

✓"Китап" нәшриәте мәктәп китапханалары фондын яңы сыҡҡан баҫмалар менән тулыландырыуҙы дауам итә. Күптән түгел нәшриәт директоры Зөфәр Тимербулатов Ишембай районының Яңы Әптек урта мәктәбендә булды һәм коллективҡа яңы баҫмалар бүләк итте.

✓Сибай һаулыҡ һаҡлау системаһын үҫтереү мәсьәләләре буйынса Республика советының ҡусмә ултырышына әҙерләнә. Бында яңы дауахана корпусы төҙөлә. Ул 1990 йылда уҡ төҙөлә башлаған була. Оҙаҡ ваҡыттан һуң төҙөлеш 2004 йылда ғына яңыртыла. Күптән түгел Сибай үҙәк ҡала дауаханаһында Өфөнән һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫарҙары, Республика клиник дауаханаһы һәм Республика перинаталь үҙәгенең баш врач урынбаҫарҙарынан торған делегация булды.

✓2-4 мартта Мәсетле районы үҙәгендә ҡубыҙсылар һәм өзләүселәрҙең I асыҡ республика конкурсы үтәсәк.

✓Республикала "Туған тел - 2007" татар йырҙарын йәш башҡарыусылар конкурсы үтәсәк. Ул республика ҡала һәм районадарында өс турҙа үтә, 25 мартта Башҡорт дәүләт филармонияһында Гала-концерт буласаҡ.

✓ ***Баланы йәш ярымға тиклем ҡарау өсөн пособие эшләмәгән әсәләргә лә биреләсәк. Беренсе сабыйы өсөн әсәләр Урал коэфициентын иҫәпкә алып хәҙер 1725 һум күләмендә пособие алһа, икенсе балаһына 3450 мең һум аласаҡ.***



СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# Милли проектмы?

## Шәп булып сыҡты ул!

**"Сәләмәтлек" милли проектының мөһимлеге хаҡында бер йылдан ашыу һөйләйбеҙ инде. Ә шулай ҙа ул проектты ғәмәлгә ашырыу һөҙөмтәләре нисек? Был өлкәлә быйыл ниндәй яңылыҡтар көтөлә?**

Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Андрей Евсюков белдереүенсә, быйыл "Сәләмәтлек" милли проектын ғәмәлгә ашырыу өсөн республикаға федераль бюджеттан 7 миллиард һум аҡса бүлеү ҡаралған. Ә республика бюджетынан яҡынса 40 миллион һум аҡса бүленәсәк.

Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә ыңғай күренештәр аҙ түгел. Мәҫәлән, былтыр беренсел звено медицина хеҙмәткәрҙәренең һаны 9 процентҡа арттан. Башҡортостанда дөйөм практика табиптары менән комплектлау 60 процентҡа тиклем күтәрелгән.

Дауалау учреждениеларын яңы диагностика ҡоролмалары менән йыһазландырыу өсөн генә лә 400 миллион һум аҡса тотонолған. Шулай уҡ милли проект сиктәрендә Башҡортостанға 150 тиҙ ярҙам автомобиле, шул иҫәптән яңы тыуған сабыйҙар өсөн реанимобилдәр һатып алынған. Былтыр дәүләт муниципаль учреждениеларында, мәғариф, медицина, социаль яклау, мәҙәниәт, спорт, физкультура һәм ғилми-тикшеренеү учреждениеларында эшләүсе 35-55 йәшлек 109 280 ҡатын-ҡыҙ менән ир-егеттәргә өҫтәмә диспансер тикшереүе үткәрелгән. Тикшереүҙәр һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, беренсе урынды йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары алһа, күҙ ауырыуҙары - икенсе, эске ағзаларға ҡағылышлы ауырыуҙар өсөнсө урында тороуы асыҡланған.

Рәсәй Социаль страховка Фондының Башҡортостан буйынса төбәк бүлексәһе идараһыһы Марат Латипов быйыл бала тыуыу һәм тәрбиәләүгә бәйле бөтөн пособие һәм түләүҙәрҙең артыуын рәсми белдерҙе. Мәҫәлән, баланы йәш ярымға тиклем ҡарау өсөн пособие эшләмәгән әсәләргә лә биреләсәк. Беренсе сабыйы өсөн әсәләр Урал коэфициентын иҫәпкә алып хәҙер 1725 һум күләмендә пособие алһа, икенсе балаһына 3450 мең һум аласаҡ. Быйыл балалар пособиеһын түләүгә генә лә 2 миллиард 500 миллион һум аҡса бүлеү ҡаралған. Ә проекттың иң мөһим йүнәлештәренең береһе булған "Бала табыу сертификаты" проекты сиктәрендә дауалау-профилактика учреждениеларына 272 миллион һум аҡса күсерелгән дә инде.

**“БАШИНФОРМ”.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# Бала тыуыуы

## ырыҫ артыуына ишара

**Кисә Өфө ҡала округы хакимиәтендә Яңы йыл төнөндә донъяға килгән сабыйҙарҙы һәм уларҙың ата-әсәләрен бүләкләү тантанаһы уҙғарылды. Хакимиәт башлыһы Павел Качкаев 32 ғаиләгә 10-ар мең һум күләмендә аҡса һәм бүләктәр тапшырҙы.**

Яңы йыл төнөндә тыуған сабыйҙарҙы һәм уларҙың ата-әсәләрен бүләкләү тантанаһы һигеҙенсе йыл рәттән уҙғарыла. Ошо ваҡыт эсендә 160 ғаилә Өфө ҡала округы хакимиәтенең махсус бүләгенә лайыҡ булған. Павел Качкаев һүҙҙәренә ҡарағанда, Яңы йыл төнөндә донъяға килгән сабыйҙар һаны йылдан-йыл арта бара. Быйылғы йылдың тәүге көнөндә Өфөлә 34 бәпес - 19 малай һәм 15 ҡыҙ бала донъяға беренсе ауазын ишеттергән.



Зәлиә Тураева менән Ринат Нафиҡов

Бүләкләнеүсе ата-әсәләр араһында , Айгөл һәм Рөстәм Ғиндуллиндар, Гөлнур һәм Динар Минһажевтар, Олег һәм Елена Ганягиндар, Рита һәм Айҙар Баҙыҡовтар, башҡа ғаиләләр, шулай уҡ яңғыҙ әсәләр ҙә бар. Мәҫәлән, тәүге бәпестәрен ҡулына алған Динар Минһажев атай булыу ҡыуанысын Яңы йыл төнөндә, бала табыу йорто эргәһендә ҡаршылаған. Улына шунда уҡ исем дә һайлаған - Йәмил. Ә Ринат Нафиков Яңы йылды ҙур тулҡынланыу, хатта бер аҙ борсолоу тойғолары менән ҡаршы алған.



Гөлнур һәм Динар Минһажевтар

- Ҡатынымды бала табыу йортона алып барып ҡалдырғас, ҡайтып, беренсе класта уҡыған ҡыҙым менән сәй табыны ҡорҙоҡ. Табиптар яҡынса 4 ғинуарҙа тыуасаҡ, тиһә лә, Хоҙай Тәғәлә беҙгә бүләк яһарға булғандыр. Тапшырыласаҡ әсәлек капиталы тураһындағы сертификатты балаларыбыҙға белем биреүгә юллаясаҡбыҙ, - ти Ринат Нафиков.

- Бала тыуыуын Яңы йыл төнөнә ниәтләгәс, һеҙ бик аҡыллы ата-әсәләр. Ә әсәлек капиталына иҫәп тотоуығыҙ һеҙҙең алдан күреп, төптән уйлап эш итеүсән булыуығыҙ хаҡында һөйләй. Афарин, ата-әсәләр! - тип шаяртып алды Рәсәй Федерацияһы Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе идараһыһы Фуат Хантимеров. Әйткәндәй, Фуат Ғәләүетдин улы тантанала икенсе һәм өсөнсө балаға әсәй булған 12 гүзәл заттың "Әсәлек капиталы" дәүләт сертификаты аласағы хаҡында хәбәр итте.

**Рәлиә БИКТИМЕРОВА.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бала тыуһа, ҡыуаныс һәм ырыҫ арта, тиҙәр халыҡта. Ә Яңы йылдың тәүге көнө яңы тыуған сабый ауазы менән башланыуы донъяларға тыныслыҡ, йортҡа бәрәкәт, ырыҫ, бәхет килеүенә ишара булһын.**

ҺМ, УЛАЙ ИКӘН...

# Милицияға...

## ышаныс арта

**Баш ҡаланың Эске эштәр идаралығы начальнигы Урал Аккучуков журналистар менән осрашыуҙа 2006 йыл һөҙөмтәләре буйынса Өфө райондарында бөтәһе 30586 енәйәт теркәлеүен билдәләне.**

Шуларҙың 7829-ы айырыуса ауыр енәйәттәр иҫәбенә инһә, 13196-һы бурлыҡҡа бәйле. Ҡылынған енәйәттәрҙең 41,7 проценты асыҡланған. Иң күп енәйәттәр баш ҡаланың Киров районында теркәлгән, унда 10000 мең кешегә бөтәһе 363,6 енәйәт тура килә. Был йәһәттән Совет, Калинин һәм Орджоникидзе райондары ла ҡалышмай.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, социолог-ғалимдарҙың былтырғы һорау алыу йомғаҡтары буйынса халыҡтың 57,5 проценты баш ҡала милицияһының эштәр органдарында эшләүсе хеҙмәткәрҙәргә ышанысы артыуын иҫбатлай.

Енәйәтселек төрләлегенә килгәндә, Өфөлә автомотранспорт, кеҫә телефондарын урлау, фатир талау, бурлыҡ һәм үлтерештәр кәмегән, ә бына ҡатын-ҡыҙҙы көсләү күренештәре йышайған. Урал Сабирйән улы шулай уҡ үҫмерҙәр араһында енәйәтселектең артыуы айканлы борсолоу белдерҙе. Өфөлә бәлиғ булмағандар тарафынан 607 енәйәт, шулар иҫәбендә кеше үлтереүҙәр, 234 урлау һәм 138 талау осрағы теркәлгән.

Эске эштәр идаралығы подразделениелары иктисад енәйәтселеге буйынса Өфөлә 4676 енәйәт осрағын асыҡлаған.

эшенән ҡәнәғәт булыуын белдергән. Ҡәнәғәт булмаусылар 3 процент ҡына тәшкил итә. Урал Сабирйән улы әйтеүенсә, был күрһәткес өфөләрҙең эске

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә йыл да үтә торған "Кеше һәм тәбиғәт" экологик акция һөҙөмтәләре тураһындағы мәғлүмәт менән хакимиәт идаралығы начальнигы Ирек Ялалов сығыш яһаны. Былтыр был акция ике этапта - 17 апрелдән 5 июнгә саклы, 11 сентябрҙән 13 ноябргә тиклем үтте.

☑ 15 ғинуарҙан "Башҡортостан Республикаһы баш ҡалаһының иң яҡшы мәғариф учреждениеһы - 2007" ҡала конкурсы старт алды. Был конкурс дүртенсе тапҡыр үткәрелә. Былтыр унда 25 мәғариф учреждениеһы катнашһа, быйыл 35 коллектив ғариза биргән.

☑ Баш ҡаланың торлаҡ баҙарында бер бүлмәле фатир хаҡы уртаса 3,2 процентҡа арзанайып, 1 квадрат метр хаҡы 56,24 мең һумға тиклем төшкән. Ә ике бүлмәле фатирҙарҙың хаҡы 2,4 процентҡа артып, бер квадрат метры 54,57 мең һумға тиклем, өс бүлмәле фатирҙарҙың хаҡы 0,8 процентҡа артып, бер квадрат метры 53,78 меңгә тиклем ҡиммәтләнгән.

☑ "Башавтотранспорт" дәүләт унитар предприятиеһына ҡараған бар автобустар ҙа туктылыштарҙы башҡортса һәм русса иғлан итә торған "һөйләүсе" техника менән йыһазландырыласаҡ.

☑ Бөгөн "Башҡортостан" күргәҙмәләр комплексында, "Олимпик-Парк"та һәм "Трамплин"да ҡышҡы ихата уйындары буйынса Бөтә Рәсәй спорт уйындары үтәсәк. Унда 14 йәштән 16 йәшкә тиклемге һәр кем ҡатнаша ала.

☑ Тимер юлсылар билдәләүенсә, ҡала яны тимер юлы сараларына ихтыяж үҫә бара. Бигерәк тә Өфө - Шишмә, Өфө - Раевка, Өфө - Иглин йүнәлешендәге поездар ҙур һорау менән файҙалана. Былтыр был ҡала яны поездары 7,7 миллиондан ашыу пассажир ташыған. Һорауҙы иҫәпкә алып, Куйбышев тимер юлы Кропачево - Әшә йүнәлешендә яңы маршрут ойошторҙо. Хәҙер Өфө - Әшә поезы Оло Тәләккә тиклем генә йөрөйәсәк. Ә Әшә - Дим маршруты Димгә Оло Тәләктән киләсәк.

☑ Бөгөн баш ҡалала 120 уйын залының 89-ы, 6 казинонң 4-әүһе ябылған, 1072 уйын техникаһы һүтеп алынған. Был хаҡта БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың булып үткән ултырышында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев хәбәр итте.

☑ 30 ғинуарҙа 17 сәғәттән 19 сәғәткә тиклем Өфө ҡала округы хакимиәтендә етем балаларҙы ғаиләләргә уллыҡҡа биреү мәсьәләһе буйынса тура бәйләнеш уҙғарыла. Телефон: 279-91-84.

www.ufacitu.info

*✓ Рәсәйҙең Федератив демократик дәүләт булып һаҡланып ҡалыуын, ысынлап та, теләһәк, иң беренсе сиратта бөтөнлөктө этнотерриториаль бөтөнлөктән башларға кәрәк.*

СӘЙӘСӘТ

# ЭТНИК ТӨРКӨМ ХОҠУҠТАРЫ...

## айырым кеше хоҡуҡтарынан мөһимерәк



**Милли сәйәсәт Рәсәй дәүләтенең төп сәйәси йүнәлешенән ситтә тороп ҡалғандай. "Рәсәй Федерацияһында милләт-ара мөнәсәбәттәр өлкәһендә дәүләт сәйәсәте нигеҙҙәре тураһында"ғы Федераль Закон проекты төбәктәрҙә үткән "түңәрәк өҫтәлдәр" ҙә шым ғына тикшерелде. Мәсьәлә яҡын арала ҡаралмаҫ та кеүек. Әммә Рәсәй субъекттарында был проектҡа ҡарата тәнҡит һүҙҙәре бик күп әйтелә. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев фекеренсә, "граждандыҡ йәмғиәте" архитекторҙары этник мәсьәләләрҙе урап үтергә тырышып, бик ҙур хата яһай.**

**● Илдус Ғөбәйҙулла улы, милләт һәм мәҙәниәт мәсьәләләрен сәйәсәттән айырып ҡарап буламы? Ғөмүмән, граждандыҡ йәмғиәте этник йәһәттән нейтраль була аламы?**

● Асылда, граждандыҡ йәмғиәте концепцияһы күп милләтле берләшмәләр өсөн һөҙөмтәле, тип әйтер инем. Әммә иғтибарҙан ситтә ҡала килгән мәсьәләләр ҙә юҡ түгел, йәки этносәйәсмәндәр һәм йәмәғәтселек эшмәкәрҙәре уларға иғтибар итмәҫкә тырыша. Яңғырашына ҡарағанда, этник милләтселек кире мәғәнәне аңлатҡан кеүек. Шул уҡ ваҡытта, граждандыҡ милләтселеге менән граждандар милләте төшөнсәһен прогрессив күренеш, тип, ауыҙын асырға йыбанмаған һәр кем әйтә. Граждандар йәмғиәте фекерен яҡлаусылар этник мәсьәләгә ҡарата нейтраль позицияла. Был дөрөҫ түгел.

**● Проблеманы нисек кенә атаһаң да, был атама уны хәл итеүҙе гарантияламай, ысынбарлыҡтан юйып та ташламай...**

● Утыҙынсы йылдарҙа этник милләтселек Көнсығыш Европа күренеше тип аталып, миҫалға Европа фашизмы килтерелде. Ул кире күренеш тип баһаланып, йәмәғәтселек фекерендә һәм фәнни эштәрҙә нығынды. Туҡһанынсы йылдарҙа, бигерәк тә элекке Совет империяһы республикалары суверенитет яулағанда, этник милләтселек мәсьәләһе тағы ҡалҡып килеп сыҡты. Рәсәй эсендә иһә "милләтселек" ярлығы Татарстанға, Башҡортостанға һәм башҡа республикаларға тағылды. Әйткәндәй, донъяның башҡа цивилизациялы өлөштәрендә, мәҫәлән, Квебек, Каталония һәм Фландрияла этник милләтселектең сағыу миҫалдарына тикшереүселәр иғтибар ҙа итмәй.

**● Әммә һәр саҡ этник милләтселек примитив һәм тупаҫ, ә граждандыҡ милләтселеге - прогрессив, тип әйтәләр бит. Береһе икенсеһен инҡар итә түгелме?**

● Айырым гражданиндың хоҡуҡтары боҙолоу осрағында быға протест белдереүсе либералдар этник нейтраллекте күҙ уңында тота. Ә инде этник әҙселекте тәшкил итеүселәр үҙ хоҡуҡтарын даулаһа, либералдар төркөмдөң хоҡуҡтарын (этник әҙселектекен түгел) ғына күрә. Уларға шундай һорау бирге килә: ни өсөн бер кешенең тауышы шундай уҡ уникаль һәм тулы хоҡуҡлы кешеләрҙән торған этник төркөмдөкөнән мөһимерәк һуң?

Рәсәйҙең нейтраль граждандыҡ йәмғиәтендә этниклыҡ һәм тел шәхси төшөнсә булып һанала. Хәҙер паспортта милләт хаҡында әйтелмәй, Конституцияла ла шул уҡ хәл.

**● Этник әҙселекте тәшкил итеүселәр үҙҙәренең киләсәгенә ышаныс менән ҡараған федератив дәүләт кенә ныҡлы була, тимәк?**

● Тап шулай. Рәсәй Федерацияһының бөтөн милли сәйәсәте этник әҙселекте тәшкил итеүселәргә тел һәм мәҙәниәт хоҡуҡтары биреүгә нигеҙләнергә тейеш. Күп кенә этник берәмектәрҙең милли-территориаль хоҡуҡтары ла юҡ. Минеңсә, юғары кимәлдәге федератив лояллек шундай уҡ этник лояллек нигеҙендә генә мөмкин. АҠШ, Канада һәм Германия тәжрибәләре миҫалдары быны асыҡ күрһәтә. Беҙ Башҡортостанда шундай сәйәсәт алып барабыҙ. Бында быуаттар һуҙымында өс этник төркөм - төрки, фин-уғыр һәм славян халыҡтары араһында бер-береһенә игелекле һәм ихтирамлы ҡараш нығынған. Мәсьәләнең субъектив яғы - республика власының аныҡ сәйәсәте. Белеүегеҙсә, республикала милли нигеҙҙәге низаҒ тарихта теркәлмәгән.

**● Илдус Ғөбәйҙулла улы, дөйөм дәүләт милли сәйәсәтенең нигеҙе булырҙай принциптарҙы нисек атарға булыр ине?**

● Рәсәйҙең Федератив демократик дәүләт булып һаҡланып ҡалыуын, ысынлап та, теләһәк, иң беренсе сиратта бөтөнлөктө этнотерриториаль бөтөнлөктән башларға кәрәк. Икенсенән, республикаларҙың, крайҙарҙың һәм өлкәләрҙең бер тигеҙ суверенлығын һәм яуаплылығын тәьмин итергә. Өсөнсөнән, субъекттарҙың федерация составына инеүҙәге ҡаҡшамаҫ традицион статусы һаҡланырға тейеш. Дөйөм күренеште боҙорға ярамай. Сөнки уның һөҙөмтәһе бик ауыр булыуы ихтимал.

Минеңсә, Рәсәйҙе дөйөм аршин менән үлсәргә маташыу ахмаҡлыҡ ҡына. Милли сәйәсәттең һәм федератив бәйләнештәрҙең күп вариантлы булыуы - ул йәшәү талабы. Бер үк төрлө ысулдарҙы Волга буйында ла, Төньяҡ Кавказда ла йәки Себерҙең аҙ һанлы халыҡтарына ҡарата ла ҡулланырға ярамай. Һәр урында милли үҙенсәлек мөһим. Конституцион үҙбилдәләнештәре төрлөсә булған халыҡтарҙың тиң хоҡуҡлығын таныу аҡыллылыҡ билдәһе түгелме ни? Минеңсә, граждандыҡ йәмғиәте күп һанлыға ла, аҙ һанлыға ла, төркөмгә лә, айырым кешегә лә ихтирам һаҡлауға нигеҙләнергә тейеш бит.

**Денис БОРОДИН. "БАШвестЪ".**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## Тормоштан ҡәнәғәттәр

**Күптән түгел Бөтә Рәсәй Йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге социологтары халыҡтан бөгөнгө тормоштан ҡәнәғәт булыу-булмауы тураһында һорау алыу үткәрҙе.**

Тикшереү һөҙөмтәләренән күренеүенсә, рәсәйҙәрҙең яртыһынан күберәге (52 %) бөгөнгө тормоштан ҡәнәғәт булыуын белдергән. Яуап биреүселәрҙең 26 процентының Брежнев заманында йәшәгеһе килһә, 4-әр проценты, X1X-XX быуаттар сигендәге һәм Сталин хакимлыҡ иткән йылдарҙа йәшәһәм, күпкә бәхетле булыр инем, тип яуаплаған. Ә Ельцин заманында йәшәргә теләүселәр ни бары 1 процент ҡына тәшкил иткән.

## Одеколондар ҡиммәтләнә

**Рәсәй хөкүмәтенең суррогатлы иҫерткес эсемлектәргә ҡаршы көрәше көсәйә бара.**

1 февралгә тиклем суррогатлы эсемлек һатыуға яуаплылыҡты көсәйтеү сиктәрендә, дарыуханаларҙағы составында спирт булған дарыуҙарҙан башлап, косметика тауарҙары һәм башҡа продукцияға хаҡтар тикшереләсәк. Халыҡтың ағыулы иҫерткес эсемлектәр менән мауығыуына юл ҡуймау маҡсатында, спиртлы продукцияға акциздарҙы күтәреү планлаштырыла.

Спиртлы эсемлектәрҙе легаль рәүештә етештереүселәр был яңылыҡты хуплап ҡаршы алды, сөнки суррогаттарға хаҡтың артыуы кешеләрҙе яҡшы продукция һатып алырға мәжбүр итәсәк.

## Үзбәк футболкаһы... һатыуҙан алына

**Роспотребнадзорҙың Башҡортостан бүлексәһе хеҙмәткәрҙәре Өфөләге сит ил сауҙагәрҙәренең эшенә тикшереү үткәреп, йылдың тәүге көндәренән үк тиерлек 20 партия тауарҙы юҡҡа сығарып, намыҫһыҙ һатыусыларға 45,2 мең һум күләмендә штраф һалырға өлгөрҙө.**

Мәҫәлән, баш ҡалабыҙҙың "Төньяҡ" баҙарында бер урында ғына 17,5 мең һумға яҡын өҫ һәм аяҡ кейемдәренең, икенсеһендә 69 флакон хушбыйҙың һатыуға яраҡһыҙ булыуы асыҡланған. Әзербайжандан килгән эшҡыуарҙың прилавкаһынан 83 пальто һәм куртканың, ә бер үзбәктең сауҙа палаткаһындағы бөтөн таҫтамалдар менән 50 футболканың бракҡа сығарылыуы халыҡтың ошоға тиклем ни тиклем дә сифатһыҙ тауарҙарға аҡса түгеүе хаҡында һөйләй.

Роспотребнадзорҙың ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса Башҡортостандағы бүлексәһе етәксеһе Әнүәр Миңлебаевтың әйтеүенсә, сифатһыҙ тауарҙарҙың барыһы ла юҡҡа сығарыласаҡ һәм бындай тикшереүҙәр үткәреү артабан да дауам итәсәк.

## Б Ә Л Ә К Ә Й  Ҡ А М У С




**Шумер**

Шумер - Ерҙәге иң иртә цивилизация. Уның боронғо ҡалаларының береһе Урҙың емереклектәренә кәмендә дүрт мең йыл. Шумерҙар Евфраттың шифалы һыуҙарын беҙҙең эраға тиклем биш мең йыл элек үк ҡуллана башлаған. Улар сүллекте дымландырғандан һуң күпереп үҫкән йәшеллектәр барлыҡҡа килә. Месопотамияла Ур, Урук һәм Ниппур кеүек ҡеүәтле ҡалалар ҡалҡып сыҡҡан.

Башняларын балкондар уратып алған ҡоролмалар зиккурат тип атала. Стеналарын ҡара, аҡ һәм ҡыҙғылт төҫкә буяп, балкондарҙы төрлө гөл һәм матур үҫемлектәр менән йәшелләндергәс, зиккураттар күҙҙең яуын алырлыҡ матур булған. Ҡайһы берҙәренең түбәһен алтын ялатылған көмбәҙ менән ҡаплағас, ҡояш нурҙары уға сағылыуҙан төрлө төҫтәргә әйләнеп, тирә-йүнгә һибелеп торған. Шумер дәүләтендәге һәр бер ҙур ҡала үҙенең зиккуратын төҙөгән. Борондан кешеләр өсөн бейек урындар Аллаһы Тәғәләгә яҡынайыу һымаҡ тойола. Шумерҙар ҙа зиккураттарҙы бейек итеп төҙөй һәм уларҙы күҙ ҡараһы кеүек һаҡлау - Шумер батшаларының төп бурысы була.

Шулай итеп, шумерҙар сүллекте дымландырып, гөл кеүек тормош төҙөп йәшәй. Ләкин нәҡ ошо арҡала тормош яйлап һүнә, йәғни ерҙе даими дымлау һөҙөмтәһендә тупраҡ тоҙлана һәм үҫемлектәр шытмай башлай. Һыуға талашҡан сит ҡала-дәүләттәр баҫҡынсылығын кире ҡайтарыуҙар, төп ерҙәрҙе даими контролдә тотоу һәм дошмандар менән башҡа төрлө өҙлөкһөҙ бәрелештәр шумерҙарҙы тамам хәлһеҙләндерә. Хатта йылға ла ағышын үҙгәртә һәм Шумерҙы ҡоролоҡҡа дусар итеп, көнбайышҡа табан юл ала. Бөгөн ҡайһы бер ҡоролмаларҙан тороп ҡалған емереклектәр генә ҡасандыр бында сәскә атҡан бөйөк цивилизация булыуы хаҡында һөйләй.



✓ Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙ күңел болоҡһоуын шоколад ярҙамында баҫырға тырыша. Ә бит шоколад хис-тойғоларҙы ярһыуын контролдә тотоусы һәм төрлө спазмаларҙың "юлын быуыусы" В6 витаминын үҙләштерергә ҡамасаулай.



УФ!

**Иң тыйнаҡ, баҫалҡы ҡатын-ҡыҙҙың да айына бер тапҡыр ажғыр холоҡлоға әйләнеүенә күрем ваҡыты яҡынлашыуы ғәйепле. Был күренеште ғалимдар күрем алды синдромы тип атай.**

# Бынынһы ла үтер...

## ҡырҡ һигеҙ сәғәттән

Күрем синдромының ниҙән ғибәрәт булыуын гүзәл заттың 80 проценты үҙ елкәһендә татып белә. Ләкин ул ҡатын-ҡыҙҙың йәшенә бәйле һәм төрлө кешелә төрлөсә үтә. Бәғзе берәүҙәр күрем алдынан ике-өс көн буйы еңелсә генә ауырыҡһына икән, кемдәрҙер аҙна буйы үҙен-үҙе ҡайҙа ҡуйырға белмәй, кәйефһеҙ йөрөй. Мәҫәлән, йәш ҡыҙҙарҙың тәнендә ваҡ ҡына ҡыҙыл нөктәләр сыға. Ә 30 йәшлектәрҙең бите шешенеүсән була. Улар хатта 3-4 килограммға тиклем һимереп, күңел төшөнкөлөгөнә бирелә башлай. 40 йәштәгеләр башы ауыртыуҙан һәм артериаль ҡан баҫымы күтәрелеүҙән ыҙалана. Организмдың дөйөм хәл-торошондағы бындай тайпылыштар, әлбиттә, гүзәл заттың холоҡон ҡырҡа үҙгәртә. Уларҙың көйһеҙлегә яҡындарының йә коллегаларының кәйефенә лә кире йоғонто яһай.

Ҙур коллективты етәкләүсе ханымдың бындай көндәр кисереүен күҙ алдына килтереүе лә ҡурҡыныс, сөнки күпме килешеүҙәргә ҡул ҡуйылмай ҡаласаҡ, планеркалар өҙөләсәк, ғаиләлә ерле-юктан ыҙғыш-талаштар ҡуйыраcаҡ.

Табиптар иһә бындай мәлдә ҡатын-ҡыҙға аҙыҡ рационын үҙгәртергә кәңәш итә. Ярма аҙыҡтарға һәм йәшелсә салаттарына өҫтөнлөк биргәндә уларҙағы углеводтың организмға көс-көүәт өҫтәүе, бер аҙ кәйефте күтәрә һәм әкрен һеңеү сәбәпле кеше үҙен оҙаҡ ваҡыт туҡ итеп тоя. Иртәле-кисле өҫтәлдән В һәм С витаминдарына бай емеш-еләк өҙөлмәһен. Ҡатын-ҡыҙ бындай көндәрҙә организмына прогестерон гормоны етешмәүенән дә мыжыҡҡа әйләнә. Ә ошо гормонға окшаш матдәләр сояла күп, тимәк уны ашау ҙа зыян итмәҫ.

Үҙегеҙҙе ни тиклем генә хәлһеҙ итеп тоймағыҙ, кәйефемде күтәрәм, тип, кофе эсмәгеҙ. Ундағы кофеин күңел ярһыуын оторо көсәйтә, ҡан баҫымын күтәрә һәм йоҡоһоҙлоҡҡа дусар итәсәк. Шулай уҡ бер, ике көн тоҙло, ыҫланған ит аҙыҡтары, әсе соус һәм кубиктан әҙерләнгән һурпа эсмәгеҙ. Тоҙло аҙыҡ организмдағы һыуҙы тотҡарлай һәм тәндең шешенеүенә килтерә. Шешенеүҙе бөтөрәм тип, һейҙек ҡыуыусы үләндәрҙән әҙерләнгән сәй эсеү ҙә тыйыла, сөнки ул һаулыҡ өсөн кәрәкле микроэлементтарҙы йыуып төшөрә. Тәбиғи һуттар эсеп һәм калийға бай йөҙөм, курага, ҡабыҡлай бешерелгән картуф ашап та шешенеүҙе бөтөрөп була.

Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙ күңел болоҡһоуын шоколад ярҙамында баҫырға тырыша. Ә бит шоколад хис-тойғолар ярһыуын контролдә тотоусы һәм төрлө спазмаларҙың "юлын быуыусы" В6 витаминын үҙләштерергә ҡамасаулай. Тәм-том ашағығыҙ килһә, иң яҡшыһы еләк-емеш кайнатмаһы йәки бал ашарға мөмкин. Әгәр организмдың баяғы В6 витамины менән байытҡығыҙ килһә, күберәк ит һәм һөт аҙыҡтары, кишер, картуф, кәбеҫтә, эфлисун, лимон ашарға кәрәк. Был осорҙа ҡатын-ҡыҙҙың организмы нервылар ҡуҙғыуын баҫыусы магнийға мохтаж булғанлыҡтан, дөгө, фасоль һәм сәтләүектән баш тартмау яҡшы. Магний шулай уҡ тауыҡ ите менән бананда күп.

Күрем ваҡытында организмдың тимерҙә 20 мг тирәһе юғалтыуы сәбәпле, бауыр, гранат һәм арыш икмәге бер ваҡытта ла табындан өҙөлмәһен. Күберәк хәрәкәтләнергә кәрәк. Француз ғалимдары донъя мәшәҡәттәре нисек кенә баҫмаһын, ҡатын-ҡыҙ көнөнә 1 сәғәт һауала йөрөргә ваҡыт табырға тейеш, ти. Саф һауала йөрөү эстә йыйылған кире энергиянан арынырға ярҙам итә һәм организмдың күңел тынысылығын тәьмин итеүсе эндорфин гормонын эшкәртеүен әүҙемләштерә.

Иң мөһиме, күрем алдынан кәйефегеҙҙең ҡырҡа кире яҡҡа үҙгәреүен фажиғәгә һанамағыҙ. Был көндәрҙә хәлегеҙ ни тиклем генә ауыр булмаһын, шуны онотмағыҙ, ҡырыҫлана башлаған минуттан һуң 48 сәғәт үттеме, яңынан һылыу, инсафлы, мөләйем ҡатын-ҡыҙға әүерелерһегеҙ.

**"Аргументы и факты" гәзитенән.**

Аһ, ҠЫҘ-ҠАТЫН!

# ГҮЗӘЛ ЗАТТЫҢ ХОЛҠО...

## яҙғы елдәй йыш үҙгәрһә

**Коллегам менән кешенең психологик торошо тураһында бәхәс ҡуйыртабыҙ. "Тормош бер үк тулҡында барырға тейеш түгел, йәшәү ҡыҙыҡ тойолһон өсөн ваҡыт-ваҡыты менән күңел төшөнкөлөгө лә, юғары кәйеф тә, пессимистик рух та кәрәк,-тинем.- Ҡатын-ҡыҙҙарға был йәһәттән бик еңел, күңел торошонаң үҙгәреп тороуын беҙгә күрем тәьмин итә". "Нисек инде?" тип аптыраны ир енесенән булған коллегам. "Сөнки күрем осоронда ҡатын-ҡыҙҙың буштан-бушҡа асыуы ҡабара, кәйефе бер төшә, бер күтәрелә, хатта тәрән төшөнкөлөккә бирелеп китеү осрағы ла ҡәҙимге иҫәпләнә",- тип оҙон хәбәргә төшөп киттем. Минең һөйләгәндә урта йәштәге ир- уҙаманы асыш кеүек ҡабул итте. "Ни эшләп иртәрәк белмәнем икән был мәғлүмәтте, ҡатынымдың холҡон яҡшыраҡ аңлаған булыр инем. Беҙ бит, ирҙәр, ҡатын-ҡыҙ - сер йомғағы, тип тик йөрөйбеҙ",-тине ул.**

Ысынлап та, гүзәл зат тураһында ир-ат бик аҙ белә, шунлыҡтан улар араһында аңлашылмаусанлыҡ тыуып ҡына тора. Әлбиттә, күрем кисергән ҡыҙ-ҡатын хәле хаҡында әсәләр, апайҙар һөйләргә яратмай, ә шулай ҙа, бәлки, ир-аттың ҡолағына төшөрөү кәрәктер.

Моғайын, һеҙҙе уратып алған гүзәл заттарҙың яҙғы елдәй кәйефе, хатта холоҡ-фиғеле, үҙ-үҙен тотошо үҙгәреүенә иғтибар иткәнегеҙ барҙыр. Әгәр



күҙәтеүсән булһағыҙ, ҡатындарҙың ҡапыл төҫһеҙләнеп китеүе лә күҙ уңынан ысҡынмаҫ. Быны арығанлыҡҡа, йоҡо туймағанлыҡҡа һылтарға мөмкин. Ләкин күп осраҡта сәбәп күрем йәки организмда барған гормональ ритмдарҙың үҙгәреше менән бәйле. Был осорҙо кисҡен көндәр, тип юҡҡа атамайҙар. Күрем күргән ҡыҙ-ҡатында эстроген һәм прогестерон, тип исемләнгән гормондарҙың йә түбәнәйеүе, йә артыуы күҙәтелә. Был түш биҙҙәренең ҡатыуына, эстең аҫтан ауыртыуына, баш әйләне-үенә, артериаль ҡан баҫы-мының күтәрелеүенә, хатта ҡоҫоуға килтерә. Психологик торош тураһында әйтеп торорға ла кәрәкмәй. Буштан-бушҡа илағы килә, агрессия көсәйә, хәл бөтә...

Күрем ваҡытында ҡатын-ҡыҙ тирә-йүндәгеләр менән йыш һүҙгә килә, ҡаты бәрелә, ҡыркыу холоҡлоға әйләнә, йә бөтөнләй үҙ эсенә йомола. Был күренеште ПМС (Предменструальный синдром), тип йөрөтәләр. Ул төрлө ҡатын-ҡыҙҙа төрлө рәүештә бара, уның ваҡыты ла бер-ике көндән ун көнгә тиклем дауам итергә мөмкин. Күптәр аҙыҡ төрләй башлай. Бик ныҡ шоколад ашағы килә, кемдер, кирееһенсә, тоҙло нәмәләргә иғтибарын йүнәлтә. Психологик торошо тоторокло булмаған ҡатын-ҡыҙға күрем осоронда яуаплы эш йөкмәтеүе ҡурҡыныс. Ҡайһы бер илдәрҙә гүзәл затҡа эшләгән ойошмаларында башҡарған эшенең үҙенсәлегенән сығып, ял бирәләр. Статистика мәғлүмәттәре буйынса, тап ошо осорҙа ҡатын-ҡыҙ тарафынан енәйәттәр йышыраҡ башҡарыла, сөнки улар организмда барған процестар арҡаһында үҙ-үҙен ҡулда тота алмай.

Һәр халыҡта ҡатын-ҡыҙҙың күрем ваҡытына бәйле боронғо хөрәфәттәр йәшәгән. Улар гүзәл заттың йәмғиәттә былай ҙа еңелдән булмаған хәлен тағы ла ҡатмарлаштырған. Мәҫәлән, көньяҡ Австралияла йәшәүсе халыҡтарҙа күрем күргән ҡатын-ҡыҙҙы ир-ат урап үтергә, ә гүзәл зат үҙенең алама хәл-торошта булыуын алдан ҡыҫҡырып хәбәр итергә тейеш була. Бәләкәй сактан уҡ малайҙарҙы, күрем күргән ҡатын менән осрашыу үлемгә килтерә, тип ышандырғандар. Индеецтарҙың ҡайһы бер ҡәбиләләрендә малдарға зыян килеүҙән ҡурҡып, күрем осоронда гүзәл затҡа һөт эсеүҙе тыйғандар. Мосолман халыҡтарында ла күрем күргән ҡатындарға ураҙа тотоу, намаҙ уҡыу, мәсеткә йөрөү тыйыла. Ләкин был тыйыуҙар гүзәл заттың һаулығын ҡайғыртыуҙан ҡабул ителгән.

**Тамсығөл ДИҢГЕҘБАЕВА әҙерләне.**

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ай һайын тирә-йүндәге ҡыҙ-ҡатындарҙың кәйефе, холҡо, һеҙгә булған мөнәсәбәте үҙгәрә ҡалһа, зинһар, төшөнкөлөккә бирелмәгеҙ, ир-уҙамандар. Бөтәһе лә ваҡытлыса икәнен онотмағыҙ, сабырлығығыҙҙы туплап, яҡындарығыҙҙы аңларға, күңелдәрен күрергә тырышығыҙ.**

### ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Юғарыла ҡаралған мәсьәләгә мөнәсәбәттәрен белеү маҡсатында ир-уҙамандарға һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

**Сайран СӘҒИТОВ, 60 йәш:**

● Ҡатыным менән дүрт тиҫтәгә яҡын йыл йәшәйбеҙ, әммә уның бер ваҡытта ла күрем осором, ауырыйым, тип зарланғанын иҫләмәйем. Тормош иптәшемдә ай һайын булған үҙгәрештәрҙе һиҙмәскә шулай уҡ иғтибарһыҙ булдым микән? Минең уйымса, заман ҡатын-ҡыҙы үҙенең боҙолған психикаһын аҡлау маҡсатында күрем осорондағы хәлен бер ни тиклем шаштыра.

**Артур МӘҠСҮТОВ, 35 йәш:**

● Мин өйләнмәҫ элек гүзәл заттың был серле хәле хаҡында бер нимә лә белмәй инем. Ҡатыным күрем ваҡытын бик ауыр кисерә, бер нисә көнгә ауырыуға һабыша. Уның аша бик күп мәғлүмәткә эйә булдым. Яҡын кешемдең хәлен еңеләйтеү өсөн кәрәк булған дарыуҙар ҙа, халыҡ медицинаһы буйынса ҡулланылған саралар ҙа яҡшы таныш миңә.

**Марсель МУРЗИН, 24 йәш:**

● Беҙ һөйгәнем менән байтаҡтан бирле осрашып йөрөйбеҙ. Уның күрем осоро яҡынлашыуын мин алдан һиҙеп торам. Сөнки ҡыҙымдың холҡо ҡүҙгә күренеп үҙгәрә, ул артыҡ эмоциональ, үҫал булып китә. Шуныһы ҡыҙыҡ, мин дә унан килгән агрессия нигеҙендә асыулы, тиҙ ҡыҙыусанға әйләнәм. Нисек кенә булмаһын, ир-атҡа был осорҙа түҙемле булырға, гүзәл заттың кисерештәрен аңларға тырышырға һәм ҡатын-ҡыҙ булып тыумағанына шатланырға ғына ҡала.

**Әхәт ҮТӘҒОЛОВ, 47 йәш:**

● Минең уйымса, тап күрем осоронда ҡатын-ҡыҙ ҡан алыштырыу менән бергә насар энергиянан ҡотолоп, рухи яҡтан таҙарына. Ҡыҙғаныска ҡаршы, ир-ат бындай мөмкинлектән мәхрүм. Ә бит борон беҙҙең атай-бабайҙар көслө заттың организмы өсөн дә "күремдең" кәрәклеген аңлап, яһалма рәүештә булһа ла уларҙың ҡанын ағыҙған. Хатта быны өсөн махсус инструменттары ла булған. Хәҙерге заманда ир-аттың артыҡ агрессив, ҡыҙыулығы арҡаһында тыуған мәсьәләләрҙең бермә-бер артыуы ошондай сараның бөгөнгө медицинала ҡулланылмауы менән бәйле түгелме икән?

***✓ Телһеҙҙәрҙе - телле, һуҡырҙарҙы күҙле итте, ишетмәгәндәр ишетте һәм башҡа ауырыуҙарҙы бер ниндәй дарыуһыҙ, медицина ҡорамалдары ҡулланмай, хатта алыҫтан тороп та дауалай алды.***



ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК

**Был мәҡәлә халыҡ араһында киң билдәлелек, оло абруй яулаған арҙаҡлы шәхесебеҙ - хәҙрәт, әүлиә, халыҡ табибы Сиражетдинов Мөжәүир Уйылдан улы тураһында. Ул 1876 йылда Баймаҡ районы Манһыр ауылында донъяға килә һәм 1967 йылда шул ауылда ерләнә.**

# МӨЖӘҮИР ХӘҘРӘТ



Белорет педагогия училищеһын тамамлап, Баймаҡ районының Байыш мәктәбенә уҡытырға килгәс, тәүге тапҡыр ишеттем Мөжәүир хәҙрәт тураһында. Уны күрергә лә тура килде, әммә яҡындан уның менән хәбәрҙәш була алмауыма әле лә үкенәм. Заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, ул заманда беҙ үтә атеист булып ҡыландыҡ. Шулай ҙа хәҙрәткә ҡарата ҡыҙыҡһыну миндә көслө булды. Ҡайҙа барма, кем менән һөйләшмә, телдән төшермәйенсә, әүлиәне маҡтап һөйләрҙәр ине, хайран ҡалып, уның табиплығын, күрәҙәселеген, һоҡланғыс кешелек сифаттарын данларҙар ине. Уның менән күрешеп, ҡатнашып йәшәүселәр, бигерәк тә үлемдән ҡотолоп ҡалыусылар үҙҙәрен бәхетле һананы һәм һанай. Мөжәүир хәҙрәт тураһында халыҡ араһында йөрөгән күп кенә ғәжәп хәлдәр хәҙер әкиәт кеүек ҡабул ителһә лә, улар - ысынбарлыҡ.

Байыш ауылынан Манһырға тиклем һигеҙ саҡырым самаһы. Ауылға ҡайтышлай, һәр саҡ Манһыр аша Сибай юлына сыға һәм Мөжәүир хәҙрәттең өлкән улы Вариста туктап, ҡымыҙ эсеп китә торғайным. Әйткәндәй, хәҙрәттең Мөхәммәт тигән улын Байышта уҡыткайным да. Уҡыуға үтә һәләтле, тырыш булды.

Манһырға килгән һайын Урғаҙа йылға буйында хәҙрәткә күренергә сират көтөп ултырыусыларҙың куплегенә хайран ҡалырлыҡ була торғайны. Күптәре арбаға ат егеп килгән. Килә алғандары - йәйәү. Ҡайһылары шунда яр буйында ут яғып, ашарға бешерә, бәғзеләре самауыр ҡайната. Яр буйы гөрләп тора. Килеүселәр, сират ҙур булғас, ике-өс көн көтөп ята торғайнылар. Йор һүҙле, әңгәмәсел, зирәк аҡыллы, изге күңелле, ярҙамсыл, оҫта табип-имсе кешеләргә үҙен-үҙе аямай ярҙам итте. Ярҙамына, кәңәшенә мохтаждар, сирлеләр Мөжәүир хәҙрәткә магнитка тартылғандай тартылыр ине.

**Улы Мөхәммәттең хәтирәләренән:**

- Атайыма ауырыу кешеләр күп килде. Алыҫ тарафтарҙан, Себерҙән, Мәскәү һымаҡ ҙур ҡалаларҙан, Ҡаҙағстан, Татарстан, Урта Азия яҡтарынан килеүселәр байтаҡ булды. Улар Урғаҙа йылғаһы буйына урынлашып, икешәр-өсәр көнләп сират көтөр ине. Атайым милләтенә, диненә ҡарамай, бай-ярлыға айырмай, ярҙамынан мәхрүм итмәне. Һәр килеүсегә иғтибарлы, итәғәтле булды. Үтә нык ауырығандарҙы, сабыйы булған ҡатындарҙы сиратһыҙ ҡабул итте. Уның тылсымлы ҡулынан барыһы ла һауығып, рәхмәттәр укып ҡайта ине. Телһеҙҙәрҙе - телле, һуҡырҙарҙы күҙле итте, ишетмәгәндәр ишетте һәм башҡа ауырыуҙарҙы бер ниндәй дарыуһыҙ, медицина ҡорамалдары ҡулланмай, хатта алыҫтан тороп та дауалай алды. Унда бөтмәҫ-төкәнмәҫ тылсым, дауалау һәләтлеге бар ине. Атайым стена аша йәки йөҙәр саҡырым аралыкта кешенең уй-фекерен, уның ниндәй уйҙа булыуын, үткәнен, бөгөнгөһөн һәм киләсәк яҙмышын үтәнән-үтә күрә торғайны. Киләсәктә ниндәй ғүмер кисерәсәген дә дөрөҫ әйтеп бирә алды. Төрлө үләндәрҙең шифалығын да яҡшы белде. Үҙе тураһында ул: "Мин энергияны юғарынан - Аллаһы Тәғәләнән алам", - ти торғайны.

Мөжәүир хәҙрәт кеше мейеһенә иркен үтеп инеп, тейешле ағзаларға телепатик тәьҫир итеп, үҙенең йоғонтоһона тулыһынса буйһондора алған. Кешене ул берсә баһадирҙай көслө, йәиһә йәнен дә тота алмаҫлыҡ ҡамырға әйләндергән. Мөжәүир хәҙрәт: "Кешенең баш мейеһендә быуаттар буйы тупланған мәғлүмәт ята. Әммә кешенең баш мейеһенең сере һаман да асылмаған көйө ҡала килә", - тигән.

Былтыр Мөжәүир хәҙрәттең тыуыуына 130 йыл тулыуға арналған кәҙер һәм хәтер кисәләре Манһыр ауылында, Сибай ҡалаһының 13-сө мәктәбендә һәм үҙе уҡып белем алған Муллаҡай ауылында үткәрелде. Халҡыбыҙҙың бөйөк шәхесенә тәрән һөйөү һәм оло ихтирам йөҙөнән бында Баймаҡ, Хәйбулла, Йылайыр, Бөрйән, Әбйәлил райондарының, Сибай, Баймаҡ ҡалаларының дин әһелдәре, ауыл биләмәләре башлыҡтары, тирә-як ауылдар халҡы йыйылды.

Зәйнулла ишан Рәсүлев, Мифтахетдин Аҡмулланың һабаҡташы Мөжәүир хәҙрәт Сиражетдинов билдәле шәхестәрҙең остазы булған бөйөк мәғрифәтсе, ғалим Абдулла ишан Сәидиҙең (1836-1914) мәҙрәсәһендә белем ала. Бында Мөжәүир хәҙрәт менән бергә "Урал батыр" эпосын беҙҙең көндәргә алып килеп еткергән Арғынбаев Ғәбит (1856-1921), Әлмөхәмәтов Хәмит (1867-1923), сәсәндәр, ахун, мәғрифәтсе, Рәсәй Дәүләт думаһы депутаты, Беренсе Бөрйән-түңгәүер кантоны рәйесе, прогрессив ҡарашлы Шаһишәриф Мәтинов (1854-1919), шулай уҡ Ирәндек буйындағы алтын приискыларының хужалары Шаҡир һәм Закир Рәмиевтар (Дәрмәнд) белем һәм тәрбиә алған. Абдулла Сәиди исемендәге Муллаҡай мәҙрәсәһендә 400-гә яҡын һәләтле һәм зирәк шәкерттәр белем һәм тәрбиә ала. Бағыусылары ошо уҡ мәҙрәсәлә уҡып сыҡҡан миллионерҙар Шаҡир һәм Закир Рәмиевтар була. Тирәяҡҡа даны таралған мәҙрәсәлә уҡытыу-тәрбиә эше халыҡ педагогикаһы нигеҙендә алып барылған. Улар төрлө һөнәрҙәргә, халыҡ медицинаһына, сәсәнлеккә, мәргәнлеккә, табип-имләүсегә, шулай уҡ тау минералдарын айыра белергә өйрәнгәндәр.

Күп кенә күренекле шәхестәргә, шулай уҡ Мөжәүир хәҙрәт Сиражетдиновҡа ла Ғабдулла хәҙрәттең тәрбиәһе, өгөтнәсихәте һиҙелерлек йоғонто яһаған. Зәки Вәлиди үҙенең "Хәтирәләр" китабында Абдулла Сәидиҙе Зәйнулла ишан менән бергә иң уҡымышлы шәхестәр рәтенә индерә. Билдәле, Зәки Вәлидиҙең үҙенең дә арҙаҡлы шәхес, күренекле ғалим, милли азатлыҡ хәрәкәте юлбашсыһы булып китеүендә Ғабдулла хәҙрәт Сәйетовтың йоғонтоһо ҙур булыуы бәхәсһеҙ. Зәки Вәлиди: "Был муллаларҙан иң уҡымышлыһы Троицкиҙан Зәйнулла ишан, Муллаҡайҙан - Абдулла ишан. Улар сәйәсәт хаҡында фекер йөрөткән аҡыллы дин әһелдәре, Абдулла ишан минең рухи етәксем булды", - тигән.

**(Дауамы бар).**

**Азамат ТАЖЕТДИНОВ.**

Баймаҡ районы.

ЙӘШӘГӘН, ТИ, ШӘХЕСТӘР

# Күк йөҙө Аллаһы -

## Ғәли Ишмурзин

Заманында "Күк йөҙө аллаһы" тип йөрөтөлгән беренсе башҡорт летчигы Ғәли Мөхәмәтйән улы Ишмурзин 1903 йылдың 15 мартында хәҙерге Ауырғазы районының Мораҙым ауылында тыуған.

1920 йылда үҙе теләп Ҡыҙыл Армияның айырым Башҡорт уксылар бригадаһына яҙыла. Баҡы ҡалаһында, Тифлиста курстарҙа уҡый, Борисоглебскиҙа летчиктарҙың хәрбитеоретик мәктәбен, Ырымбурҙа летчиктар мәктәбен тамамлай. Башҡорт хөкүмәтенең юллауы буйынса, 1934 йылда Өфө Осоавиахим мәктәбенә күсерелә. 1935 йылдан БАССР Осоавиахимы Үҙәк Советының хәрби летчиктар мәктәбе начальнигы итеп билдәләнә. 1937 йылда ялған яла буйынса ҡулға алына. Ҡулға алғас, уны илгә хыянат итеүҙә һәм милләтселектә ғәйепләйҙәр. Унан һорау алған следователдәрҙең һөйләүенә ҡарағанда, тукмауҙарға тешен ҡыҫып түҙгән Ғәли Ишмурзин үҙен хыянатта ғәйепләй башлаһалар, һикереп тороп һуғыша башлай торған булған. Төрмәлә ваҡытта үҙенең "баш бирмәҫ башҡорт"лоғон күрһәткән. Милләтселектә ғәйепләүҙең дә "нигеҙе" була - ул уҡыткан летчиктар араһында Муса Гәрәев кеүек башҡорт егеттәре лә булған. 1938 йылда аҡлана, әммә 1942 йылда Осоавиахимдың Стәрлетамаҡ мәктәбендә һынау осоуҙары үткәргән саҡта һәләк була.

Серле үлеме арҡаһында онотола яҙа был исем. Ә бит Ишмурзин тәрбиәләп үҫтергән летчиктарҙың егерме дүртәүһе Советтар Союзы Геройы, Муса Гәрәев - ике тапҡыр Герой!

Ғәли Ишмурзиндың исемен уҡыусылары Глеб Баранов менән Надежда Извицкая күтәреп сыкмаһа һәм аҙағырак уның тураһында яҙыусы Фәзим Шафиков яҙмаһа, данлы башҡорт уҙаманы хаҡында бөтөнләй тиерлек мәғлүмәттәр ҡалмаҫ ине. Урыҡ-һурыҡ документтар араһында Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевтың остазының ғаиләһенә фатир юллап Партияның Башҡортостан Өлкә Комитетына яҙған хаты һаҡлана. Унда ошондай юлдар бар: "Ғәли Мөхәмәтйән улының хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Ул бөтөн башҡорт летчиктарының уҡытыусыһы һәм кәңәшсеһе булды, уның хеҙмәтенең онотолоуы үкенесле..."

Республикала ойошторолған үҙәк авиаклубтың беренсе рәйесе Ғәли Ишмурзин хәрби авиация кадрҙары әҙерләүгә тос өлөш индерә.

Өршәк буйында урынлашҡан бәләкәй генә Мораҙым ауылы халҡы данлы яҡташын онотмай. 1992 йылда Ауырғазы районы Чапаев исемендәге колхоз рәйесе Факил Дилмөхәмәтов тырышлығы менән Ғәли Ишмурзинды иҫкә алыу көнө үткәрелә.

Ғәли Ишмурзин кеүек арҙаҡлы башҡорт егеттәренең исеме халыҡ күңелендә уйылып яҙылырға тейеш.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

**Константин УШИНСКИЙ**

# Ялҡаулыҡ һәм...

## еңел-елпе йәшәүгә әүәҫлек

**Бала тыумыштан ялҡау булмай. Уның ни тиклем хәрәкәт итеүен, ни тиклем уйын уйнауын ҡарау ғына ла был фекерҙең дөрөҫлөгөн раҫлай.**

Бала бөтөн нәмәне лә үҙаллы эшләргә ынтыла. Әгәр ошо мәлдә баланың үҙаллылыҡҡа ынтылышын тупаҫ рәүештә тыйып һүндерһәң, уңышһыҙлыҡҡа осраясаҡһығыҙ.

Балаға шулай уҡ ҡулынан килмәҫ эш ҡушып та биҙҙереү ихтималлығы бар. Бер ынтылған эшен башҡарып сыға алмаһа, икенсеһенә лә күңеле һүрелер. Аҙаҡ, бала бик ихлас башлағайны, һүрелде лә ҡуйҙы тип аптырауға ҡаласаҡһығыҙ.

Баланы туктауһыҙ ни менән булһа ла шөғөлләндереү ҙә уның ялҡауланыуына килтерә. Ул аҙға ғына булһа ла илке-һалҡы эшләп алғыһы килеү теләге менән яна башлай.

Шулай уҡ бала өсөн туктауһыҙ шөғөл табып, бер төрлө шөғөлө тамамланыу менән икенсеһен әҙерләп тороу үҙаллы уйлау, үҙенә-үҙе шөғөл табыу, ҡыйыулыҡ, баҙнатсылыҡ, ышаныс һәләттәрен юғалта.

Балалар баҡсаһында ла балаларҙы әҙер план буйынса уйнатыу бик мауыҡтырғыс булһа ла зарарлы. Бындай уйындар баланың ижади хыялын сонторлай. Балалар баҡсаһында уларға мөмкин тиклем күберәк үҙаллылыҡ бирергә кәрәк. Балалар баҡсаһында аралашыу, бергәләшеп уйнауҙар ҙа ни тиклем генә күңелле булмаһын, барыбер балаға үҙаллы тыныс ҡына ултырып уйлау, ниҙер башҡарыу бик мөһим. Шаулы урында быға өлгәшеп булмай. Өлкәндәргә балаларҙың шөғөлө әһәмиәтһеҙ булып тойолһа ла, был үҙаллы шөғөл үҙаллы ижадты үҫтереүгә ыңғай йоғонто яһай.

Баланың ваҡытын бушҡа үткәрмәҫ өсөн төрлө шөғөлдәр уйлап сығарып, үҙаллылыҡҡа аҙ ғына булһа ла мөмкинселек ҡалдырылмаһа, бала үҙ ваҡытын үҙе һәр төрлө эш менән тулыландырып өйрәнмәһә, ул үҙ күңел донъяһын үҙенсә ҡора алмаясаҡ, ә беҙҙең теләгебеҙгә яраҡлаштырасаҡ. Ә инде уларға шөғөл табыусы булмаһа, бала таянысһыҙ ҡала һәм бәләкәй саҡтан үҙенең күңел донъяһы булдырылмағанлыҡтан, ҡаңғыра башлай, еңел-елпе шөғөл менән көн үҙғарырға мәжбүр була. Ундай шөғөлдәр: ваҡ-төйәк хәбәр, ғәйбәт, еңел-елпе күңел асыу ҡәнәғәтләндермәй башлаһа, күңел бушлығын тышҡы мауығыу менән тулыландыра алмай башлаһа, кеше икенсе ергә күсеүгә, ҡайҙалыр китеү һымаҡ шөғөл эҙләй башлаясаҡ. Әммә икенсе урында ла ошондай уҡ ауырлыҡтар, ҡаршылыҡтар буласаҡ. Илдән илгә күсеүселәр араһында күңел бушлығын тулыландыра алмай йонсоғандар байтаҡ осрай. Улар күңел бушлығынан ҡасыу сараһы эҙләй, әммә ул бушлыкты урындан урынға үҙҙәре менән бергә йөрөтәләр. Хатта янсыктары тулы аҡса йөрөтөп, ни теләһәләр, шуны һатып ала алһалар ҙа күңел бушлығын тулыландырырлыҡ сара тапмайҙар. Улар иһә рухи яҡтан ярлы байҙар.

**Илгизәр ДИҠҠӘТ.**

✓*Егет кеше ҡасан да булһа өйләнергә тейеш. Был ҡағиҙә элек бик тә көслө ине: ир-егеттәр йәше етеү менән өйләнеү яғын ҡарай торғайны, хәҙергеләр һымаҡ өйләнмәйенсә йөрөмәнеләр.*



Киске Өфө

# ИЛ ЯҘМЫШЫ МЕНӘН

## ир менән ҡатын араһы ныҡ була

**Белорет районының Мулдаҡай ауылында йәшәүсе Зәйнетдиновтар бына 45 йыл инде башҡаларға үрнәк булырлыҡ татыу ғаилә тормошо менән йәшәй. Ғәли ағай хаҡлы ялға сыҡҡансы мәктәп директоры, Нәсимә апай башланғыс кластар уҡытыусыһы була. Атаһының юлын дауам итеп, улдары Тимур быйыл ғына сафҡа ингән яңы мәктәптең директоры вазифаһын башҡара. Килендәре Айгөл дә - уҡытыусы. Ғаилә тарҡалыу ғәҙәти күренешкә әйләнеп барған заманда оҙаҡ йылдар ғаилә йылыһын татып йәшәгәндәр үҙ ҡәлғәһен ел-дауылдарҙан нисек ҡурсалай? Уларҙың үҙенсәлеге нимәлә: ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәме, бала баға белеүҙәме, әллә башҡа төрлө сәбәптәре бармы? Зәйнетдиновтар ғаиләһе менән осрашыу алдынан ошондай һорауҙарға яуап табырға уйлағайным, әммә һөйләшеү икенсе юҫыҡта килеп сыҡты. Шулай булһа ла үҙем әҙләгән һорауҙарға яуап таптым, буғай. Һеҙ табырһығыҙмы икән?**

**▶ Ҡатын-ҡыҙ һөйгәне менән тәүге осрашып танышыуҙы яҡшыраҡ хәтерләй, тиҙәр. Баҡһаң, ҡыҙҙар ир-егеттең шул ваҡытта ниндәй кейемдә булыуын энәһенән ебенә тиклем хәтерҙә ҡалдыра икән. Шулаймы?**

**НӘСИМӘ:** Ғәлиҙе бишенсе класта тәүге тапҡыр нисек күрһәм, шул килеш хәтеремдә. Ысынлап та, кейеменә тиклем хәтерләйем. Беҙ дәрес башланыр алдынан физик күнекмә яһап тора инек, ул һуңлап килеп инде. Тубығына тиклем етеп торған кирза итек кейгән, өҫтөндә төҫө уңа башлаған бушлат, башында аҡ яһалма каракуль бүрек. Хәҙер Ғәли минән гел көлә: "Һин мине шул тәүге күреүҙән ғашиҡ булғанһың", - ти. Ят кеше шундуҡ иҫтә ҡала бит, шуға хәтерҙә ҡалғандыр инде. Сумкаһын стена буйына ҡуйҙы ла, беҙҙең менән бергәләп, күнекмә яһай башланы.

**ҒӘЛИ:** Мин Нәсимәгә Ассы мәктәбенә килеп уҡый башлағас, алтынсы кластан бирле иғтибар итә башланым.

**НӘСИМӘ:** Әллә, мин бер ҙә һиҙмәнемсе...

**▶ Ирҙәр, кәләш алдым тип, күкрәк ҡаға. Ғәмәлдә, ҡатын-ҡыҙҙар буласаҡ тормош иптәшен һайлай түгелме? Тәҡдимде ирҙәр яһай, әммә һуңғы һүҙ һәр саҡта ла ҡатын-ҡыҙ яғында. Әгәр ҙә ул ризалығын бирмәһә, ғаилә барлыҡҡа килмәй.**

**НӘСИМӘ:** Ямаштыла эшләп йөрөгәндә Ғәлиҙән осрашып һөйләшеү тураһында хәбәр алғас, башта ризалашманым. Хәбәрҙе еткергән Мәликә апайға: "Ғаилә ҡороу - бирсәткә алмаштырып кейеү түгел, ризалығым юҡ", - тинем. Икенсе көнө Ғәли ағаһы менән һыбай килеп еткән. Мин йәшенеп ҡалдым.

**ҒӘЛИ:** Егет кеше ҡасан да булһа өйләнергә тейеш. Был ҡағиҙә элек бик тә көслө ине: ир-егеттәр йәше етеү менән өйләнеү яғын ҡарай торғайны, хәҙергеләр һымаҡ өйләнмәйенсә йөрөмәнеләр. Буйҙаҡ йөрөгән егеттәр ҙә, эскелек тигән нәмә лә булманы, һәр кем донъя көтөргә тырышып торҙо. Ә өйләнгәс, икеләтә тырышлыҡ кәрәк. Бына был өйҙө мин үҙем һалып сыҡтым. Етешһеҙ саҡтар ҙа булды. Бирешмәнек, тырыштыҡ. Эшләп тә йөрөнөк, балаларҙы ла тәрбиәләнек. Оҙаҡ өйләнмәй йөрөүемдең сәбәбе ситтә эшләү арҡаһында булды. Өс йыл Архангел районында эшләнем. Шулай ҡырҙа эшләп йөрөгәндә атайым Фәрит ҡустымды ебәреп, ҡайтарып алды. Мәктәптә бер йыл эшләгәс, Башҡорт дәүләт университетына ситтән тороп уҡырға индем. Шул йылды көҙ өйләндем.

**НӘСИМӘ:** Ризалыҡ бирмәй арыуыҡ йөрөнөм. Бер көн килгәнендә, һүҙеңде бир, тип ныҡыша. Ҡапылғара ҡалай итеп һүҙ бирәһең. "Юҡ", - тинем. Шул хәтлем ныҡыш булды ул. Ахырҙа: "Хат яҙ, мин яуап яҙырмын", - тинем. Хат көтәм - юҡ та юҡ. Ә ул ҡайтышлай туғандарына: "Октябрь байрамына туй була, әҙерләнегеҙ", - тип әйтеп ҡайтҡан, имеш. Ялға ауылға ҡайтһам, инәйем: "Һин кейәүгә сығырға һүҙ бирҙеңме ни?" - ти. "Юҡ", -тим. "Һуң, Ғәлиҙең туғандары октябрҙә туй була, тип, әҙерләнеп яталар бит", - ти. Аптыраным. Шулай сентябрь үтеп китте. "Кейәүгә бармайым", тип, яуап яҙыр инем, Ғәлиҙән хат юҡ. Бер көн атаһын ебәргән был. Апайымдар шул хәбәрҙе еткерергә Ямаштыға килеп етте. Ә мин һаман ризалашмай ҡырталашам. Ныҡыш булғанмындыр инде: "Минең башты ашаһағыҙ, туйырһығыҙ", - тип яуап яҙып ебәрҙем. Ә өйҙәгеләрем буласаҡ ҡайныма ризалыҡ биреп ҡайтарып ебәргән. Шулай, минең ризалыҡһыҙ яулап алды ул.

**▶ Ҡыҙыҡ. Ғәли ағай, ә һеҙ ниңә хат яҙманығыҙ?**

**ҒӘЛИ:** Ә нимәгә ул хат? Унын ризалығын шундуҡ һиҙҙем - ҡыҙҙарҙың холҡо шулай: инәлтергә яраталар. Улар ни, бер төрлө уйлай, икенсе төрлө һөйләй, ә мин алдан һиҙҙем - ғаилә буласаҡ. Шулай булды ла...

**▶ Туйҙар гөрләп үткәндер инде... Әлбиттә, бөгөнгө туйҙарҙан айырмаһы ла ҙур булғандыр.**

**НӘСИМӘ:** Туй ни 6 ноябрҙә башланғайны 12-һенә тиклем дауам итте. Элек туйҙар шулай бер аҙна була торғайны. Ғәлиҙәр яғы туйға һыбай килгәйне. Ассыла матур итеп ҡар яуҙы. Атайым, мәрхүм, ҡәшәүәй сана егеп оҙатты. Йәш туғандарым тау артылғансы "Хуш, ауылым"ды йырлай-йырлай, 5-6 саҡрым оҙата килде. Ҡайным менән ҡәйнәм һыбай, беҙ Ғәли менән санала киләбеҙ. Килә биргәс, ҡәйнәмде санаға ултыртып, уның атына һыбай менеп алдым. Ғәлиҙең ауылына төнгә килеп еттек. Фәрит ҡәйнештәр, мылтыҡ атып, шау-гөр килеп ҡаршы алды. 1961 йылдың 12 ноябрендә шулай Мулдаҡайға килен булып төштөм. 1 декабрҙән мәктәптә уҡыта башланым. Ҡәйнә йортонда алты йыл йәшәнек, шунан үҙебеҙ өй һалып, башҡа сыҡтыҡ. Аллаға шөкөр, 45 йыл татыу ғүмер итәбеҙ.

**ҒӘЛИ:** Туйҙың икенсе яртыһы мәктәптәге яҙғы каникул ваҡытында булды. Университетта сессия ваҡыты тура килгәнгә, кисектереп торорға тура килде. Шулай уҡ беҙҙең яҡтағы туй ҙа бер аҙна буйына дауам итте. Элек бит туй йолалары күп ине. Ҡоҙалар туйҙан яҡын туғандар кеүек ҡайта торғайны. Хәҙер туйҙы бер көндә үткәрәләр ҙә, аҙаҡ ҡоҙалар бер-береһен танымай ҙа хатта.

**▶ Килен төшкән еренә таш кеүек ерегә, тиҙәр... Ҡатын-ҡыҙҙың тыуған ере килен булып төшкән ергә күсә, тип тә ебәрәләр. Нәсимә апай, яңы урынға күнегеүе ауыр булманымы?**

**НӘСИМӘ:** Санаға ултыртҡанда атайым: "Ҡыҙым, барған ереңә бат, ҡайтам тип ауыҙыңды асма", - тине. Уның һүҙен тоттом. Элек бит ололар һүҙе закон ине. Ауырлыҡтар булманы түгел, булды, әммә атай һүҙе бер була икәнен яҡшы аңлай инем. Ҡәйнәмә ҡаршы бер һүҙ әйтмәнем. Илаған саҡтар ҙа булды. Шишмәгә һыуға барған арала илап алам да, өйгә ҡайтыуға күҙ йәштәрен һөртөп инәм, бер нәмә лә белгертмәнем. Шуға улым кәләш алһа, киленемә бер һүҙ әйтмәҫмен, тип һүҙ бирҙем. Әле шул һүҙемдә торам.

**▶ Һеҙҙеңсә, ғаиләлә кем баш? Ғөмүмән, баш кәрәкме, татыу ғаиләлә, бәлки, ике яҡтың да йөктө тигеҙ тартыуы мотлаҡтыр?**

**НӘСИМӘ:** Ир - баш, ҡатын - муйын, тиҙәр. Муйын ҡайҙа борола, баш шунда борола. Донъяны ҡатын тота. Ҡатын насар икән, донъя болара.

**ҒӘЛИ:** Һәр кемдең үҙ фәлсәфәһе. Һин ҡатындарса фекер йөрөтәһең. Бына һин ҡатын нисек теләй, ирҙе шулай бора ала, тиһең. Әле күп ҡатындар эскесе ирҙәре менән йәшәргә мәжбүр. Ә ниңә һуң улар ирҙәрен теләгән яҡҡа бормай?

**НӘСИМӘ:** Ундайҙар ирҙәренең холҡон үҙгәртергә хәленән килмәһә лә, донъяны үҙҙәре көтә. Эскән ир ҙә үҙен баш итеп тоя, күрәһең...

**▶ Үҙемде борсоған тағы бер һорау бирәйем: ҡатнаш никахҡа мөнәсәбәтегеҙ ниндәй? Үҙебеҙҙең респонденттарға был һорауҙы беҙ йыш бирәбеҙ. Һорау - бер, яуап - мең төрлө...**

**ҒӘЛИ:** Ҡатнаш никахҡа мин ҡәтғи ҡаршымын. Бер генә миҫал килтерәм. Белорет ҡалаһында өс туған ағайым йәшәне. Уның ҡатыны мәрйә булды. Шул тиклем һәйбәт еңгәй ине: барһаң, асыҡ йөҙ менән ҡаршы ала, ҡунаҡ итә - ҡайһы бер үҙебеҙҙең башҡорт еңгәләре ары торһон. Әммә ағайым гел генә: "Ҡустым, өйләнһәң, бер ваҡытта ла мәрйәгә өйләнмә, - тип әйтә торғайны. - Еңгәң бөтөн яҡтан да һәйбәт. Донъя көтөүгә тырыш, туған-нәҫелдәрҙе айырып ҡарамай. Шунығы ҡыйын: табындарҙа күберәк уның туғандарында булырға тура килә. Улар урыҫса һөйләшә. Минең башҡортса һөйләшеп, йырлап ултырғым килә. Миңә шул тиклем ҡыйын". Ул үлеп киткәнсә шуны тылҡыны.

**НӘСИМӘ:** Үҙ милләтеңә етмәй инде ул. Башҡорттар һан яғынан ни өсөн кәмей һуң? Урыҫҡа кейәүгә сыҡҡандың балаһы - урыҫ, татарға сыҡҡандыҡы - татар. Ҡатнаш никахтар арҡаһында башҡорттар күп кәмей. Тағы бер нәмә күңелде ҡыра: тота килеп, башҡорт балаларына сит-ят исемдәр ҡушалар. Урыҫ исеме башҡортҡа бармай ул. Берәй билдәле кешенең исемен ҡушалар ҙа, балаһы ла билдәле булып китә, тип уйлайҙар, шикелле.

**▶ Өйҙә балалар тауышы сыҡмаһа, ҡот осҡос башҡа тауыштар ишетелә башлай, тигән бер аҡыл эйәһе. Балаларығыҙ хаҡында һөйләп китһәгеҙ ине.**

**НӘСИМӘ:** Өс бала тәрбиәләп үҫтерҙек. Дүрт малай, бер ҡыҙыбыҙ бала саҡта үлде... Улыбыҙға Тимерхан исеме ҡушып, ҡурсалап алып ҡалдыҡ. Балаларыбыҙ үлеп торғас,



✓*Атайым беҙҙә әкиәттәр, дини хәҙистәр, бәйғәмбәрҙәр тураһындағы тарихтар һөйләп тәрбиәләне. Уның һөйләгәндәренең күбеһе бөгөн дөрөҫлөккә тап килә.*

ҡәйнәм Ғәлиҙе Инйәргә алып барып өшкөртөп, кейемдәрен йылға аша ташлап ҡайтты. Өлкән ҡыҙыбыҙҙы тәҙрә аша һатып алдылар. Шундай ырымы бар. Кесе ҡыҙыбыҙ тыуғас, апайым ете төрлө тукыманан тегелгән күлдәк кейҙерҙе. Ул күлдәге әле лә бар. Дини ырымдың файҙаһы тейҙе, Аллаға шөкөр. Ғөмүмән, ырымдарҙың көсөн баһалап еткермәйбеҙ. Мәҫәлән, Асылға бер апайҙың балалары үлеп тик торғас, ул бер улына Тимерхан, икенсеһенә Сынтимер тип исем ҡуштырғайны, икеһе лә тороп китте.

**ҒӘЛИ:** Мин ул ырымдар мәжүсилек осоронан ук киләләр, тип уйлайым.

ятлап ҡарайым, булмай. Бала саҡтыҡы иһә - ғүмерлек. Совет мәктәбе, Алла юҡ, тип өйрәтте. Тимәк, изгелек юҡ, тигәнде аңлатҡан ул. Йөйәктәге еҙнәм: "Һин уҡытҡан ваҡытта эстән генә, Алла бар, Алла бар, тип ҡабатлап тор", - ти торғайны.

**ҒӘЛИ:** Аллаһы Тәғәлә барлығына элек-электән ышандым. Күпме көсләһәләр ҙә, партияға инмәнем. Ул саҡта район да партияла тормаған берҙән-бер мәктәп директоры булдым. Коммунистар үҙ ирке менән йәшәй алманы. Бигерәк тә коммунист мәктәп директорҙарын бер урындан икенсеһенә күсереп ыҙалата торғайнылар. Ә бит кешенең үҙ тыуған

# йәшәһә,

яғында йәшәгеһе, эшләгеһе килә. Ҡайҙа ул һорап тороу! Коммунист булһам, мин дә Мулдаҡайҙа йәшәй алмаҫ инем. Әлбиттә, башҡа мәктәптәргә ебәреп ҡаранылар, килеп сыҡманы - партияһыҙлығым ҡотҡарҙы.

▶ **Мулдаҡай леспромхозы "иҫән саҡта" ауылда тормош гөрләп торған кеүек ине. Ул бөткәс, ишетеүемсә, ауыл шаңҡып ҡалған. Бөгөн көрсөктән сығып киләһегеҙ, буғай?**

**ҒӘЛИ:** Аллаға шөкөр, ауылдың хәле яҡшыра. Леспромхоз бит тик ағас ҡырҡып, ситкә ташыу менән генә шөғөлләнде, ауыл тураһында ҡайғыртманы, социаль мәсьәләләрҙе хәл итмәне: йүнле юл, өй төҙөү булманы. Ул ваҡытта ауыл уҡытыусыһына ла иғтибар юҡ ине. Мәҫәлән, магазинға әйбер килһә, уҡытыусыларҙы иҫәпкә алманылар, тик леспромхозда эшләүселәр өсөн цехкомдың исемлеге менән тарата торғайнылар. Бер мәл хәйләләшергә тура килде хатта. Магазинға кер йыуыу машинаһы алып килгәндәр. Теге эшләмәй. Һатыусы: "Ҡара әле шуны, ни сәбәптән эшләмәй икән", - ти. Ҡараһам, сәбәбе ябай ғына: бер ток үткәргес сымы ысҡынып тора. Мин әйтәм: "Быны кире ремонтка ебәрергә кәрәк, эшкингәндәй түгел". "Әтеү, үҙең ал", - ти. Алдым да, "йүнәтеп" тә ҡуйҙым. Әле лә тотонабыҙ, ныҡ булып сыҡты.

Ауыл халҡы бөгөн үҙ көсөнә таянып йәшәй башланы. Мәҫәлән, хәҙер картуфты күберәк сәсәләр. Көҙ, шуны һатып, файҙаһын күрәләр. Малды ла күп аҫырайҙар. Вахта ысулы менән Себергә йөрөп эшләүселәр күбәйҙе. Быйыл ауылда яңы мәктәп сафка инде. Был ҙур ҡыуаныс - мәктәп булмаһа, ауыл һүнә, быға иманым камил. Бик күп йәштәр яңы өй ҡалҡыткайны, мәктәп авария хәлендә булғас, Искуштыға, башка яҡҡа күсте. Әле лә өй күтәреп, ҡыйығын ябалар ҙа, ҡырға әшкә китәләр. Аллаға шөкөр, яңы мәктәп бар, хәҙер ҡырҙағылар яйлап тыуған яғына ҡайтыр, тигән ышаныс бар. Сөнки бөтөн кеше балалар өсөн йәшәй, ә бала өсөн тәү сиратта мәктәп кәрәк. Үткән килгәнендә хөкүмәт башлығы Байдәүләтов: "Мәктәп төҙәйбеҙ ҙә ул, балалар булырмы?" - ти. "Мәктәп булһа, балалар ҙа булыр", - тим. "Һин бер анекдоттағы хохол һымаҡ әйтеп ҡуйҙың", - тип көлә. Шунан һөйләп бирҙе. Бер хохолдың өйө яна башлаған. Ҡатыны өй тирәләп йүгереп йөрөп: "Балаларҙы ҡотҡарығыҙ!" - тип ҡысҡыра икән. Ә хохол: "Башта салоны алып сығығыҙ, - ти икән. - Сало будет, дети будут".

▶ **Клуб урынында элек мәсет булған, тиҙәр...**

**ҒӘЛИ:** Эйе, ул урында элек мәсет булған. 1936 йылда уның манараһын бысып төшөргәндәр, шунан бирле ул кисен - клуб, көндөҙ мәктәп булған. Манараны кем бысканы ла билдәле, әммә был турала һүҙ ҡуйыртыу кәрәкмәйҙер, сөнки ул үҙ ирке менән эшләмәгән бит быны. Ҡәһәре төшкәндерме, белмәйем, ул машина аҫтында тапалып үлгән. 1967 йылда яңы мәктәп төҙөлгәнсе балалар шунда уҡыны. Әле яңы мәсет төҙөү тураһында уйлайбыҙ. Тормош дауам итә. Төпкөл ауылдар бөтә, тиҙәр ине, Аллаға шөкөр, гөрләтеп йәшәп ятабыҙ. Хөкүмәткә рәхмәт, Ассыға тиклем шоссе юл һалынды, электр линияһын яңырттылар, почтаһы, фельдшер пункты менән бергә комплекслы мәктәп төҙөлдө. Тағы нимә кәрәк? Йәшәргә лә йәшәргә инде...

Әлбиттә, Ислам диненең йоғонтоһо ҙур. Ул мәжүсилек осорондағы ырымдарҙы ниндәйҙер бер ипкә һалған. Ырымға күп кеше ышана. Мәҫәлән, "утҡа төкөрмә, телең күберсер" кеүек тыйыу утҡа табыныу осоронан ук киләләр. Күп ырымдар халыҡ араһында мәҡәлдәр формаһында нығынып ҡалған. Шишмәләргә, ғөмүмән, һыуға табыныу кеүек ырымдар бөгөн экологик яҡтан әһәмиәтле. Тимәк, мәжүсилектең дә файҙаһы, әһәмиәте ҙур, уны инҡар итергә ярамай. Әйтәйек, торнаны изге ҡош тип һанау үҙ һөҙөмтәһен бирә бит - башҡорттар торнаға һунар итмәй. Аҡҡоштарға ҡарата ла шундай ук мөнәсәбәт булғанға, улар яҡлаулы.

**НӘСИМӘ:** Элек бит электр ҙа, радио-телевидение лә булманы. Атайым беҙҙә әкиәттәр, дини хәҙистәр, бәйғәмбәрҙәр тураһындағы тарихтар һөйләп тәрбиәләне. Уның һөйләгәндәренең күбеһе бөгөн дөрөҫлөккә тап килә. Мәҫәлән, атайым урам буйлап китеп барғанда урамдағы эттәр абалап ҡаршы сығыр, тип һөйләй торғайны. "Ниңә улай?" - тиһәк, "Ахыр заман яҡынлашҡан һайын кешеләр шулай бер-береһенә яуызлыҡ уйлай башлар", - тип яуаплай ине. Шулай түгелме? Бөгөн бит һуғыш, ыҙғыш-тартыш, яуызлыҡ күбәйә бара. Атайым тағы шулай дауам итә: ары бара бирһәм, ни күрәм: һәр кем үҙ ҡаҙанында аш бешерә...

**ҒӘЛИ:** Ҡаҙанда ҡайнаған аш, ут көслө булғас, бер ҡаҙан аша икенсеһенә барып төшә...

**НӘСИМӘ:** Был нимәне аңлата? "Ахырызаман яҡынында кешеләр күршеһе менән түгел, байыраҡ кеше менән аралашыр, эргәһендәге ярлы күршеһен онотор", - ти торғайны атайым. Бала саҡта атайым өйрәткән доғалар бөгөн дә хәтеремдә. Әле яңы доғалар ятлап ҡарайым, булмай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Иғтибар иткәнһегеҙҙер, Ғәли ағай менән Нәсимә апай әңгәмә ваҡытында ғаилә яҙмышын ил яҙмышына бәйләп фекер йөрөтә. Совет осоронда барлыҡҡа килгән ғаиләләрҙең үҙенсәлеге, бәлки, ошондалыр. Бөгөнгө ғаиләләр ниндәй нигеҙҙә төҙөлә һәм, ғөмүмән, заманса ғаилә институты бармы икән? Телевидение рекламалары аша шат йылмайған яһалма атай-әсәй һәм шат бала ғаилә нисек булырға тейеш тигән һорауға бер тамсы ла яуап бирмәй. Өйрәнәһе йолаларыбыҙ, үрнәк алырҙай ғаиләләребеҙ барҙа, бәлки, ғаилә бәхете тигән ҡиммәтте ситтән эҙләмәй, өлгөлө ғаиләләр тураһында йышыраҡ яҙырға кәрәктер.**

**Радик ӨМӨТКУЖИН**
**яҙып алды.**

*ҠОМАР*

# ШҮМӘКӘ

**(Хикәйәт)**

**Мин был хикәйәтте 50 йыл элек, бала саҡта әсәйемдән ишеткәйнем. Тәүҙә уны ауылдың аҡылы етешмәгән бер малайынан көлөү тип уйланым. Баҡтиһәң, бында аҡыл етешмәүсәнлек юҡ, ә төпкөл ауылда кеше менән аралашмағанға күрә һөйләшә белмәгән баланың ошондай көлкөлө лә, уңайһыҙ ҙа хәлгә ҡалыуы күренә.**

Төпкөлдә ятҡан бәләкәй бер ауылда бер ваҡыт тоҙ бөтә. Гөләндәм апайҙың күрше ауылда хәлле генә йәшәгән бер ҡустыһы була. Хужабикә уға 12 йәшлек улы Шүмәкәне ебәрә.

-Мәхмүт ағайыңдарға барып, бер бөтөн ярты бот тоҙ алып ҡайт, - тип, әсәһе малайҙы юлға оҙата.

Сыйыр алдынан: "Һин онотоп ҡуйма, бер бөтөн ярты бот тоҙ...", - тип тағы ла киҫәтә малайын. Шүмәкә "бөтөн ярты бот, бөтөн ярты бот", тип ҡабатлай-ҡабатлай, өйҙән сығып китә.

Урмандан яланға сыҡҡас, малай ашлыҡ урып йөрөүселәрҙе күрә лә улар янынан "бөтөн ярты бот тоҙ, бөтөн арты бот тоҙ", тип ҡабатлай-ҡабатлай, үтеп бара икән. Башҡа һүҙ әйтә белмәгәнгә күрәләр инде. Ураҡ урыусы оло ғына апай Шүмәкәне туҡтата ла:

-Кеше иген урғанда улай тип түгел, ырҙынға бәрәкәт, тип әйтергә кәрәк, - тип апай кеше малайҙы төҙәтеп ебәрә.

Малай әсәһе әйткән һүҙҙе шундуҡ онота ла был апайҙың һүҙен ҡабатлай-ҡабатлай ары китә.

Икенсе бер ауыл эргәһенән үтеп барғанда зыяратта кешеләр мәйет ерләп йөрөйҙәр икән. Белгән һүҙен онотоуҙан ҡурҡҡан малай зыярат янынан "ырҙынға бәрәкәт, ырҙынға бәрәкәт", тип үтеп бара икән. Шул ваҡыт ерләүселәр араһындағы бер оло кеше малайға нык асыулана.

-Мәйет ерләгәндә улай әйтәләрме ни, алйот, иҫәр,- тип Шүмәкәгә бер-ике тапҡыр әләктереп тә ала. Малай аҡырып илай, һүҙҙәрен дә онота. - Бындай саҡта "иманын юлдаш итһен", тип әйтергә кәрәк.

Шүмәкә "иманын юлдаш итһен", тип әйтә-әйтә, артабан йүгергән. Күпме барғандыр, юл ситендә һарыҡ һуйып торған бер көтөүсегә тап булған был. Шүмәкәнең бер туктауһыҙ "иманын юлдаш итһен" тип ҡабатлағанын ишеткән көтөүсе:

-Маңҡорт, мал һуйғанда "һуярың һимеҙ булһын", тип әйтергә кәрәк, - тип малайҙың ҡолағын бороп ебәрә.

Малай "һуярың һимеҙ булһын", тип әйтә-әйтә, артабан китә. Бына бер саҡ көн кисләүгә табан ағаһының ауылына яҡынлаша малай. Ауылға етәрәк һыу буйындағы туғайҙа туй бара икән. Табын түрендә егет менән ҡыҙ ултыра, уларҙы ҡунаҡтар тәбрикләй, котлай, бүләк бирәләр. Шүмәкә улар янынан "һуярың һимеҙ булһын, һуярың һимеҙ булһын", тип үтеп кенә барғанда, быны ишеткән кейәү егет малайҙы тотоп ала.

-Мин кәләште һуйыр өсөн алмайым, бергә йәшәү өсөн алам, алйот, туйығыҙ ҡотло булһын, тип әйтергә кәрәк, аңһыҙ, - тип ул Шүмәкәне төрткөләп ебәрә.

Ҡурҡышынан ҡото алынған Шүмәкә ағаларының өйөнә "туйығыҙ ҡотло булһын, туйығыҙ ҡотло булһын", тип барып инә. Малайҙан башҡа бер төрлө лә һүҙ әйттерә алмаған өйҙәгеләр аптырашта ҡала. Улар малайҙы ҡунаҡ итә, әммә нимә тип кенә һораһалар ҙа, теге "туйығыҙ ҡотло булһын", тип ҡабатлап тик тора икән. Етмәһә, үҙе шыңшый, илай икән. Ағаһы ҡустыһы менән бер нисек тә аңлаша алмағас, йылға буйына балыҡ ҡармаҡларға төшөп ултыра. Шүмәкә лә уға эйәрә. Һыу буйына килгәс, малай ҡултығы аҫтына ҙур ғына йоморо ташты ҡыҫтырып, ҡайҙалыр китергә уҡталғанда, ағаһы:

-Ул бер бөтөн ярты бот ташты ҡайҙа алып бараһың, ташла, ул һиңә нимәгә кәрәк ул? - тип әйтеүе булған, малай ағаһын ҡосаҡлап ук алған.

-Эй, иҫемә төштө, әсәйем һинән бер бөтөн ярты бот тоҙ алырға ебәрҙе, - тигән теле асылған Шүмәкә.

**Миҙхәт БАЙРАМҒОЛОВ.**
Баймаҡ ҡалаһы.

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# Ирлек дәрәжәһе

...бер-бер артлы төшөп алғандар ҙа, арттан килгән ҡатын ҡысҡырып, бөтөн урамды яңғыратып, ирен әрләй. Тегеһе ниндәйҙер йомошон үтәмәгән, ахры. Ире бер ни ҙә өндәшмәй, алға атлауын дауам итә. Үҙе, былар ҙа ишетәме икән, тигән һымаҡ, ҡуркыңҡырап, уңайһыҙланып, ҡаршыһына килгәндәрҙең күҙҙәренә тексәйә.

Бына шулайтып юҡҡа сығарабыҙ, бәҫен төҫһеҙләндерәбеҙ инде ирҙәрҙең. Шунан:"Һинең ирлегең инде..."- тип ауыҙ ҡыйшайтабыҙ. Әлбиттә, әлеге ир үҙенә эт һымаҡ өргән ҡатынының өнөн ваҡытында тыйһа, урам буйындағы бындай ҡысҡырыш булмаҫ ине...

Хәйер, аллы-артлы төшөп, ҡысҡырып ҡатынын әрләп килгән ирҙәрҙе лә осраткан бар. Тәүге осраҡта ла, икенсеһендә лә ирлек дәрәжәһе бәҫһеҙләнә, йәмғәт. Ир булығыҙсы әле!

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

***Әрмелә аҙыҡ-түлек норманан сығып туҡлыҡлы ризыҡтарҙан әҙерләнә. Ғәҙәттә, бындай аш-һыуға өйрәнмәгән егеттәр тәүҙә ашай алмай, хатта ябығып китә.***

# Әрме V



## Әрме тәртиптән башлана

**Өфөләге 1-се интернат-мәктәптә ун йыл уҡыу дәүерендә көн тәртибен теүәл үтәргә, ололар менән яҡшы мөнәсәбәттә булырға өйрәнгәс, миңә хәрби тәртипкә күнегеү ҡыйын булманы...**

Шуныһы ла бар - сержанттар "шаяра". Учебкала "бабайҙар" юҡ, бөтәһе лә бер призывтан, власть кесе командирҙар ҡулында. Отбойҙан һуң казармаға улар хужа. Сисенеп ятырға 45 секунд ваҡыт бирелә, ошо ваҡытта бер генә курсант һуңлаһа, бөтә взвод кире тороп кейенә, янынан "отбой" иғлан ителә. Был хәл 3-4 тапҡыр ҡабатлана. Беҙҙең взводта бер белорус егете бар ине, фамилияһын онотҡанмын, бөтәһе лә уны "Чадо" тип йөрөттө. Күберәк шуның арҡаһында "Ванька-встанька" ролендә булырға тура килде.

Әрмелә ул ваҡытта ла эсеү бар ине, шәмбе етһә, сержанттар "төшөрөп" алып, ҡыҙыҡ эҙләй башлай. Курсанттар йоҡларға ятҡас, үҙ-ара һөйләшеп тауыш сығарһа, шуны ғына көткән старшина: "Батарея, подъем, форма номер четыре, выходи строиться". Форма N4 тигәне - майка-трусикта ғына көйө стена менән тимер карауаттар араһына теҙеләбеҙ. Старшина ноток һөйләй ҙә тағы команда бирә: "Батарея, отбой!" 45 секундта ятып өлгөрмәнәләр, команда ҡабатлана.

Йәнә бер күренеш. Батарея сафта китеп бара, унда командаһыҙ һөйләшергә, йырларға, ситкә сығырға ярамай, Устав ҡушмай. Кемдер шул талаптарҙы һанға һуҡмаһа, команда яңғырай: "Бегом марш!", йәғни бер һыйыр бөтә көтөүҙе бысрата. "Берәү - бөтәһе, бөтәһе - берәү өсөн", шунһыҙ тәртип тә, кесенең олоға буйһоноуы ла булмаҫ ине. Ә был ҡанундарҙы үтәмәһәң, әрме юҡ тигән һүҙ.

Яңы ғына хеҙмәткә саҡырылған Сванадзе исемле бер грузин бар ине. Ҡайтырға булһаҡ, был сафҡа баҫмаҫҡа рөхсәт һорай, имеш, ул йүгерергә ярата. Ризалаштым. Әммә ул алдан төшеп китә лә, бер 50-60 метр үткәс, рәхәтләнеп атлап ҡайта, башҡалар стройҙа йөрөй. Мин быны һиҙеп ҡалдым һәм был хәйләкәр һалдатты сафтың иң алдында йөрөтә башланым.

Тағы бер миҫал. Беҙҙең дивизион Волковысск тигән ҡала урынлашҡайны, Лида ҡалаһында - бригада, Гроднола - корпус штабы. Мин дивизион буйынса дежур инем, ҡапҡа төбөндә дежур дневальный торорға тейеш. Ул, өшөнөм, тип, ҡаҙанлыҡҡа инеп ултырған. Шул ваҡыт казармала ҡыңғырау шылтыраны. Мин урамға йүгереп сыҡтым, ҡараһам, ҡапҡа төбөндә ҡара "Волга" машинаһы тора, бер офицер ҡыңғырау төймәһенә баҫа. Дневальный юҡ. Мин машинаға йүнәлдем, унда папаха кейгән полковник ултыра. Ишекте асмай ғына рапорт бирергә маташам: "Иптәш полковник, дивизион буйынса дежур сержант...". Мине тыңлап торманылар, машина боролдо ла китте. Һуңынан белеүебеҙсә, был полковник корпус штабы начальнигы булған икән. Дивизион командиры подполковник Меркуловҡа ныҡ эләкте, мине саҡ-саҡ гауптвахтаға оҙатманылар.

## Ҡолаҡ ашаусы Панфил

Әрмелә бер әйтем бар: "Һалдат кухняға яҡыныраҡ, начальствонан йыраҡыраҡ йөрөргә тейеш". Ашау әрмелә мөһим әһәмиәткә эйә. Аҙыҡтың сифатын врачтар тикшереп тора. Ҡыҫҡаһы, беҙ хеҙмәт иткән осорҙа был йәһәттән проблемалар юҡ тиерлек ине. Әле генә ул урлашыу көслө, һалдат ҡаҙанына төшөргә тейешле аҙыҡ-түлек ситкә китә, әрмегә сифатһыҙ ризыҡ һатып алалар, хатта быны өсөн ғәйепле генералдар яуапҡа тарттырыла.

Хәрби часҡа төндә барып еттек, клубҡа индерҙеләр, ҡайҙа етте, шунда ятып таң аттырғас, мунсаға алып киттеләр. Аҙаҡтан хәрби форма бирҙеләр, погон, петлица кеүек нәмәләрҙе тегеп, эмблемалар тағып алғас, һалдатҡа оҡшап киттек. Әммә һаман ашатмайҙар, төш етте, асбыҙ. Бер ваҡыт сержанттар ашханаға алып китте. Оло бер бина, 20-шәр кешелек өҫтәлдәр, һауыт-һаба - тимерҙән. Кәбеҫтә һурпаһын эскәс, бутҡа менән бешерелгән суска майы таратып сыҡтылар. Мин аҙыҡты ситкә этеп ҡуйҙым, быны сержант Хатинюк күреп ҡалды ла: "Эй, егет, суска ите ашамаһаң, һин армияла үләһең", - тине. Уның һүҙҙәрен әле лә онотмайым. Әммә мин суска итен ашамаһам да, үлмәнем. Был маһайыу түгел. Әрмелә бөтә кешегә лә тигеҙ ҡараш булырға тейеш, ашауҙа ла, өҫ кейемендә лә, мөнәсәбәттә лә. Һин ҡатмарлы механизмдың бер шөрөбө, закон нигеҙендә хеҙмәткә алынғанһың - һиңә бер ниндәй ҙә ташлама юҡ. Хәрби хеҙмәт Уставында әйтелгәнсә, "ҡыйынлыҡтарҙы намыҫ менән һәм лайыҡлы еңеп сығырға тейешһең".

Әрмелә аҙыҡ-түлек норманан сығып туҡлыҡлы ризыҡтарҙан әҙерләнә. Ғәҙәттә, бындай аш-һыуға өйрәнмәгән егеттәр тәүҙә ашай алмай, хатта ябығып китә. Әҙерәк өйрәнеп алғас, бирелгән аҙыҡ етмәй башлай. Спорт менән шөғөлләнеү, марш-бросоктар аппетитты аса, әммә яйлап һалдаттар нормаға күнегә. Ашханала йәһәт ашарға кәрәк, сөнки старшина алдан ашап бөтә лә команда бирә: "Батарея, встать, выходи строиться!" Өлгөрһәң - өлгөрәһең, өлгөрмәһәң - юҡ. Мин яйлап ашарға өйрәнгәс, бер-ике тапҡыр сафҡа һуңланым. Һөҙөмтәһе бер - сираттан тыш наряд. Ашханалағы оло-оло ҡаҙандарҙы таҙартырға, иҙән йыуырға тура килде.

Беҙҙә 200-ләп суска аҫырайҙар ине. Хәрби ҡаласыҡтың ситендәге ике ҙур һарайҙан һаҫыҡ еҫ килеп торҙо. Гражданскийҙар эшләнә, Санька тигән бер һалдат, ғәҙәттә, төш ваҡытында аҙыҡ ҡалдыҡтарын алырға килә. Өҫтөндә иҫке форма, аяғында резина итек. Ул да, мин ракета ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иттем, тип һөйләгәндер инде ауылына ҡайтҡас. Минең ҡулға эләгерһегеҙ әле, тигәндәй, шикле генә йылмайып, тәмәкеһен көйрәтә. Ысындан да, сираттан тыш наряд алған һалдаттарҙы старшина уның ҡарамағына биреп ебәрә. Санька уларҙы бер сафҡа теҙеп, суска фермаһына табан алып китә.

Учебканан һуң дивизионға килгәс, кешесә туҡлана башланыҡ. Дүрт кешелек өҫтәл, икмәген-майын буйтым бирәләр, аҙыҡ төрләндерелә. Бында ла суска тоттолар. Көҙөн һимертеп һуялар ине. Иттең яртыһы офицерҙарға китә, беҙгә - ҡалғаны.

Ҡалала ит комбинаты бар ине, ике яҡлы килешеү буйынса хеҙмәттән буш һалдаттарҙы шунда эшкә йөрөттөләр. Уртаға бүленгән һыйыр, суска түшкәләрен вагон-һыуытҡыстарға тейәйбеҙ. Польшаға оҙатҡандарҙыр инде. Сик буйы 40 километр ғына. Панфил фамилиялы мөһабәт кәүҙәле бер молдаван хеҙмәт итте. Бер түшкә итте бер үҙе күтәреп ташыр булды. Уның бер ҡылығына мин әле һаман аптырайым, Панфил бысаҡ менән сусҡаның ҡолағын киҫеп ала ла, сей көйө тоҙлап ашай торғайны. Шул хәтлә ас булдымы икән, йә беҙҙә аптыратырға маташты микән, билдәһеҙ...

Яңыраҡ гәзиттә бер хәбәр уҡыным. Тымыҡ океан флотына саҡырылған матростарҙы хәрби госпиталдә яткырып ашаталар икән, ысын мәғәнәһендә һимертәләр, сөнки дистрофиктар, үлсәмдәре етмәй. Шул уҡ флотта матростарҙың астан үлеү осраҡтары хаҡында ла яҙғайнылар. Беҙ хеҙмәт иткәндә ундай хәлдәр булманы, совет хөкүмәте армияны хәстәрләй торғайны.

## Әрме көслөнө үҙ итә

Әйтеп китеүемсә, сержанттар әҙерләүсе мәктәпкә беҙ 70 кеше килдек. Шуларҙың унлабы башҡорт, егермеләбе татар ине. Әммә барыбыҙ ҙа урыҫса һупаларға тырыша. Дәүләттең һәм коммунистар партияһының "совет халҡы берлеген" барлыҡҡа килтереү сәйәсәтенең һөҙөмтәһе ине был. Беҙ, Башҡортостандан килгән егеттәр, күберәк әзербайжандар һәм дағстандар менән аралаштыҡ. Мин дағстан егеттәренең "лидеры" Магомедов менән аралаштым, Дербент ҡалаһынан килгән Ян Павловский менән дуҫлашып киттек. Ул милләте буйынса поляк ине, ата-әсәһе Дағстан яҡтарына нисек килеп сыҡҡандыр, үҙе лә белеп етмәй ине. Төрлө милләттән булыуҙарына ҡарамаҫтан, Дағстан егеттәре берҙәм һәм дуҫ йәшәне, бер-береһенә терәк һәм ярҙамсы булды.

Украинанан, башлыса Ҡырымдан саҡырылғандар үҙҙәре бер төркөм ине. Порт ҡалаларында үҫкәнгәләр, улар апаруҡ тотанаҡһыҙ, тәртипһеҙ ине. Феодосиянан килгән Анатолий Федько - "Толик" лидерҙары булды. Улар үҙҙәренсә бер төрлө, бошоноп бармайҙар, көлкө-шаярыуға әүәҫтәр, хәрби кейемдә лә үҙҙәренсә бер зауыҡ менән кейәләр, иҙеүҙәре асыҡ, итектәре "гармошкалы", ҡайыш билдән күпкә аҫта... Ғәҙәттә был ҡиәфәттә "дембелдәр" генә йөрөй, әммә Ҡырым егеттәре учебкала уҡ үҙҙәрен "блатнойҙар" итеп күрһәтергә тырышты.

Өсөнсө бер ҙур төркөм - Молдавиянан килгән егеттәр. Уларҙың бөтәһен дә молдавандар тип йөрөттөк, араларында урыҫтар ҙа, украиндар ҙа, гагауздар ҙа, хатта бер болгар егете лә бар. Улар ҙа бер-береһе менән дуҫ булды, өйҙән килгән посылкаларын үҙҙәре генә бүлешеп ашай, өймәкләшеп тәмәке тарта. Араларында ауыл малайҙары күберәк, урыҫ телен йүнләп белмәйҙәр. Лидерҙары Кишинев ҡалаһынан саҡырылған Николай Казаку. Мин уны "футболер" тип йөрөттөм, сөнки ул Советтар Союзының юғары футбол лигаһында сығыш яһаған "Нистру" командаһында уйнаған. Мыҡты кәүҙәле, йомро битле, ҙур танаулы кеше, иркенлеккә өйрәнеүе күренеп тора, уҡырға ла, хәрби һөнәргә лә өйрәнергә ашҡынып бармай, күберәк курилкала ләстит һатырға, яҡташтары менән командалыҡ итергә ярата. Беҙ уның менән тәүге осрашҡанда уҡ бер-беребеҙҙе оҡшатманыҡ. Беҙгә, татар менән башҡортҡа, "чурка"тип кәмһетеп ҡарарға маташты. Әйткәндәй, Ҡырым "блатнойҙары" беҙҙе шулай тип атарға баҙнат итмәне, ғәҙәттә был "тамға" Урта Азия, Ҡаҙағстан яҡтарынан саҡырылғандарға тағылды, сөнки Башҡортостан егеттәре уҡыуҙа ла, хәрби уйындарҙа ла, спортта ла ал бирмәне, йәмәғәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнаштыҡ. Беҙҙең взводта Фәнүз - отделение командиры, мин - комсорг, беҙ Рәйес менән спорт ярыштарында, айырыуса турникта уйнауҙа, ал бирмәйбеҙ. Спортсы булып танылған Казакуға был оҡшамай, ул футболдан башҡа бер ерҙә лә үҙен күрһәтә алмай, айырыуса гимнастикала, турник, брусьяларҙа күнекмәләрҙе үтәй алмай.

Икенсе яҡтан, минеңсә, союздаш республика кешеләре нишләптер беҙгә, автономиялы республиканан саҡырылған егеттәргә, ниндәйҙер өҫтөнлөк менән ҡарарға маташты. Бер уйлаһаң, быны сәбәбе бар ине. Ул хәрби хеҙмәттә генә түгел, көндәлек йәшәйештә лә күренде.

Һәр милләттең үҙ ғорурлығы, үҙ ҡиммәттәре бар, кемдер сәнғәте менән маһая, кемдәр ғөрөф-ғәҙәттәрен өҫтөн ҡуя, ҡайһылары үҙҙәренең тарихи бөйөклөгөн дәлилләй, тәбиғәтен, ҡатын-ҡыҙҙарын маҡтай һ.б. Әлбиттә, ошолай булырға тейеш тә, был - тәбиғи. "Патриотизм" тигән төшөнсә һәр кемдең ҡанында, рухында булырға тейеш.

Бер халыҡты икенсеһенән өҫтөн ҡуйырға тырышыу, кәмһетеү, мыҫҡыллау күренештәре армияны ла урап үтмәне. Вино яһауҙан, тәмәке үҫтереүҙән ары китә алмаған молдавандар ҙа үҙҙәрен әлләкемгә ҡуйып маташты. Бер көндө иртәнге физзарядканан һуң эркелешеп йыуыныу бүлмәһенә инеп барабыҙ. Йүгерә-атлай китеп барһам, кемдер аяҡ салды, саҡ-саҡ йығылмай ҡалдым. "Куда рвешь, чурка", - тип минән алда инеп китте умывальныйға. Әлбиттә, был Казаку ине. Мин дә ҡарап торманым, елкәһенән тотоп, тәртәп ебәрҙем, ул минең яңаҡҡа һелтәне, китте алыш... Курсанттарҙа йыуыныу ҡайғыһы китте, урыҫ-молдавандар - Казаку, әзербайжандар - минең яҡлы. Ярай әле инструктор-сержант Юра Архангельский килеп айырҙы. Әтеүһә...

Ошонан һуң мыҫҡыллау-көләүҙәр бөттө, һуңынан Коля менән дуҫлашып уҡ киттек. Казакуның аяҡ салыуына яуап бирмәһәм, ул һаман да үҙен минән өҫтөн һанап йөрөр ине әле. Әрме көслөләрҙе генә үҙ итә шул...

**(Дауамы бар.)**

**Фәнил ҠОҘАҠАЕВ.**

**✓ *Хәҙер үлсәп кенә уйлайымдыр, үлсәп кенә һөйләйемдер һымаҡ, сөнки минең артымда тәжрибә ята. Йәш айырмаһы, теләйһеңме-юҡмы, ижадта барыбер үҙенең сағылышын таба.***



# ИРЕКЛЕ ФЕКЕР

## иректә тыуа

**Ваҡытты көндәргә, айҙарға, йылдарға бүлеп өйрәнгәнбеҙ. Бактиһәң, ваҡыттың беҙ иғтибар итмәгән бүленеше лә бар икән. Ул - мәңгелек менән дәғүәләшеп, шәхси мәнфәғәтте ситкә ҡуйып, халҡыңа хеҙмәт иткән файҙалы ваҡыт икән. "Ижадхана" рубрикаһының сираттағы ҡунағы Рәшит ШӘКҮР менән һөйләшеүҙән һуң ваҡыттың ни тиклем ҡәҙерле бүләк булыуын һәм башҡа бик күп донъяуи хәҡиҡәттәр тураһында уйландыҡ.**

### Күңел күҙе ауылда асыла

Мин ауылдан сыҡҡан кеше. Ижадҡа килгәндә, уны ауылдыҡы, ҡаланыҡы тип бүлеүе ҡыйын. Күпселек яҙыусылар ауыл балалары, ҡалала ижад итә, ә ҡаланың үҙендә үҫеп сыҡҡан яҙыусылар әле саҡ күренә башланы. Үҙҙәре айырылған хәлдә лә, уларҙың ата-әсәләре ауылдан айырылмаған. Ғөмүмән, ижад үҙе тәбиғәт донъяһына, тыуған ергә, унда йәшәгән кешеләргә бәйле. Ҙур ҡалала кеше үҙен яңғыҙ тоя. Кешенең күңелен тәбиғәт иркенлеге, офоҡ киңлеге үҫтерә. Ҡала өйөнөң тәҙрәһенән ҡаршылағы өй генә күренә, ауыл өйөнөң тәҙрәһенән яңы донъя башлана. Рус әҙәбиәтенә килгәндә, уларҙа ҡала прозаһы тигән төшөнсә бар. Хатта ныҡлы үҫешкән проза тип тә атарға була уны. Ҡала кешеһе, бәлки, тәбиғәттән алыҫ та китмәгәндер, әммә ул тәбиғәт ҡосағында үҫкән Аксаков кеүек, үләндең һәр бер ҡыяғына тиклем яратып, тәбиғәттә бар матурлығында һүрәтләй алмай.

### Икенсе тапҡыр тыуыу

Ижадтың үҙ осорҙары бар. Бөгөн мин, мәҫәлән, 20-30 йәштәге һымаҡ дыуамалланып фекер йөрөтә алмайым. Хәҙер үлсәп кенә уйлайымдыр, үлсәп кенә һөйләйемдер һымаҡ, сөнки минең артымда тәжрибә ята. Йәш айырмаһы, теләйһеңме-юҡмы, ижадта барыбер үҙенең сағылышын таба. Шиғриәт өсөн иң һәйбәте - иртәрәк өлгөрөү. Музыкала ла шулай. Ижадсы ни тиклем иртәрәк өлгәрә, шул тиклем үҙен тиҙерәк һәм күберәк аса. Әҙәм балаһында шиғри тойғолар уяныуы донъяға икенсе тапҡыр тыуыуы менән бер. Ул һәр нәмәгә, беренсе тапҡыр асҡандай, яңынан гәжәпләнеп ҡарай башлай. Икенсе тапҡыр таныш күренеш ул тиклем тәрән тәьҫир итә алмай. Иң ҡиммәте - беренсе тәьҫир, беренсе тойғо. Шағир шулай тыуа. Күпмелер арауыҡ эсендә шағир донъяны үҙе өсөн йә асып өлгәрә, йә оҙаҡҡа һуҙа. Оҙаҡҡа һуҙылыуы үкенесле. Донъяны тәү башлап асҡан осор әҙәбиәт өсөн иң ҡәҙерле яңылыҡтарҙы алып килә. Был йәһәттән Бабич һәм Рәшит Назаров ижады өлгә булырлыҡ, таң ҡалырлыҡ. Әммә кеше яҙмышы төрләсә: шиғриәттә лә һуңлап, йә яйлап өлгәреү бар.

### Шағир үҙен-үҙе уҡыта

Шиғриәтте музыка менән сағыштырып ҡараһаҡ, беҙҙә музыкаль һәләтте аса торған уҡытыу алымдары һәм уҡыу йорттары бар. Мәҫәлән, һәләтле балалар музыка мәктәбен тамамлай, һуңынан сәнғәт училищеһы һәм сәнғәт академияһы ишектәрен аса. Буласаҡ композиторҙар, йырсылар, рәссамдар өсөн мөмкинлектәр булдырылған, уларҙы махсус уҡытыусылар үҫтерә. Талантлылар төрлө конкурстарҙа ҡатнашып, һәләтенә баһа ала. Был тәжрибә үҙ һөҙөмтәһен бирә. Ә әҙәбиәттә ундай әҙер юл юҡ. Ата-әсәһе, туғандары буласаҡ талантлы әҙипте алдан һиҙемләп, ғаилә тәрбиәһе аша тәрбиәләүҙәре, йүнәлеш биреүҙәре мөмкин, әлбиттә. Әммә бындай осраҡтар бик һирәк. Ә шулай ҙа һәр бер баланың нимәгә һәләтле икәнен табырға һәм йүнәлеш бирергә мөмкиндәр. Һәр балала төрлө һәләт була: ҡайһы береү тик математиканы үҙ итә, икенсеһе - тәбиғәтте, өсөнсөһө техника ярата. Артислыҡ һәләтен дә алдан тойомлап була. Шулар араһында шағирлыҡ таланты бик һирәк күренеш. Әммә күңел күҙе менән ундай һәләтте лә күреп була. Бала әле үҙенең мөмкинлектәрен белеп бөтмәгән сакта тәжрибәле уҡытыусылар дөрөҫ йүнәлеш бирһә, һәләттәр дөрөҫ асылыр ине.

### Шағир тигән танытма юҡ

Берәүгә лә шағир тигән танытма бирмәйҙәр. Әгәр ҙә башҡалар шағир тип таный икән, ул - шағир. Ләкин таныу мәсьәләһе лә бик ябай түгел. Шағир һүҙе кеше йөрәгенә үтеп инһә, башҡалар уның шиғырҙарын күңел дәфтәренә күсерһә, яттан һөйләп йөрөһә (быныһы, бәлки, мотлаҡ түгелдер), ул - шағир. Әйтәйек, шағирлыҡ мәсьәләһендә Акмуллабыҙ яҙмышы был һорауға асыҡлыҡ индерә ала. Ул башҡорт телендәге китаптар ғына түгел, гәзит-журналдар сыҡмаған осорҙа йәшәгән. Осраҡлы ғына Шиһабетдин Мәржәнигә арналған мәрсиәһе баҫылып сыҡҡан. Мәржәни ныҡ билдәле булғаны өсөн генә баҫылған ул, Акмулла билдәле булған өсөн түгел. Үҙе иҫән сакта башҡа бер шиғыры ла баҫылмаған. Үлгәндән һуң да айырым-айырым шиғырҙары ғына донъя күргән. Совет осоронда Акмулла оҙаҡ осорға онотоуға дусар ителде. Әммә уны халыҡ онотмаған! Уйлап ҡарағыҙ, 60-сы йылдарға тиклем мәктәп дәреслектәрендә башҡорт әҙәбиәте буйынса бер төрлө яҙыусылар программаға индерелһә, шул уҡ осорҙа әлекке быуын кешеләренең ҡағыҙҙары араһында, күңел дәфтәрҙәрендә, хәтерендә Акмулла йәшәгән. Был бик хәүефле күренеш, әлбиттә. Ваҡыт үтеү менән быуындар алмашына һәм хәтер һайый. Әгәр ҙә 30-сы йылдарҙа уҡ Акмулла ижадына иғтибар булһа, уның күп әҫәрҙәре юғалмаҫ ине. Аяныслы яҙмыш аша Акмулла барыбер бөйөктәр рәтендә торған шағир булып әйләнеп ҡайтты. Тимәк, ижад кешеләр күңелендә урын тапһа, ул мәңгелеккә аяҡ баҫа.

### Һәүәҫкәрҙәр шағирмы?

Шағирҙы әҫәрҙәренең күләме менән билдәләмәйҙәр, сөнки күләм төрләсә була. Буранбай сәсәндән ҡалған ижад емешенең күләме ҙур түгел, әммә ул - классика, ул - мәңгелек. Ә бит Буранбайҙың "Буранбай" йыры башта бәйет булып тыуғандыр, тип фараз итергә була. Йыр итеп тәүге башҡарыусыһы ла Буранбай булғандыр, сөнки һүҙ менән йыр бер бөтөн. Тимәк, күләм шағирлыҡты хәл итмәй. Кеше яҙмыштары төрләсә: кемгәлер әҙ генә ғүмер бирелә, икенсегә - ижадсы булараҡ яйлап асылыу мөмкинлеге. Ләкин шағирмын тигән шағир үҙ ғүмерендә үҙе генә әйтә торған һүҙҙе әйтеп өлгөрә. Салауат Юлаев ижады ла быға асыҡ миҫал. Шиғриәтте үҙешмәкәргә һәм профессионалға бүлеп булмай. Үҙешмәкәр композитор тигән төшөнсә бар. Үҙешмәкәр рәссамдар ҙа бар, ә бына үҙешмәкәр шағир юҡ. Рәссам, композитор, музыкант профессиональ яктан әҙерләү мәктәбен үтһә, шиғриәттә ундай мәктәпте шағир үҙе үтә. Ул үҙе эҙләй, үҙе таба, үҙе



***Башҡорттарҙы әҙ һанлы халыҡ, тиҙәр. Мин быны менән килешмәйем. Әлбиттә, беҙ күп һанлы халыҡ түгел, уртаса һанлыбыҙ. Әйтәйек, һан буйынса Рәсәйҙә дүртенсе торабыҙ икән, был һәйбәт күрһәткес. 143 миллион халыҡ йәшәгән Рәсәйҙә ике миллионға яҡын башҡорт йәшәүе күп яктан ыңғай күренеш. Эргәбеҙҙә йәшәгән урыҫ кешеһе беҙҙең рухи байлыҡҡа көнләшә хатта. Беҙҙең рухи донъябыҙҙан торған ҙур дәүләт кимәлендәге бөтөн яктан үҫешкән мәҙәниәтебеҙ бар. Әҙәбиәтебеҙ, музыкабыҙ, фольклорыбыҙ, аҡыл эйәләребеҙ, батырҙарыбыҙ, тарихыбыҙ бар!***

формалаштыра, йә, үкенескә ҡаршы, юғалып та ҡала. Йә булмаһа, бик күп юғалтыуҙар, ҡаршылыҡтар аша үтә. Һирәк осраҡта ғына ул үҙ-үҙен бик тиҙ табыуға өлгәшә. Был бәхетле осраҡ, әлбиттә. Музыка мәктәбе тибындағы шағирҙар мәктәбен төҙөп тә булмай. Әммә урта мәктәптәге туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусылары, ғөмүмән, шиғриәтте аңлаған тәрбиәселәр ижад өсөн уңайлы мөхит булдыра ала.

### Рухи байлыҡ һорап килмәй

Яҙыусыға донъяның матди, иҡтисади мәсьәләләрен хәл итеү инструменты бирелмәгән. Әммә ысын шиғриәт, ысын әҙәбиәт, юғары рухлы мәҙәниәт кеше өсөн һауа һымаҡ. Бөгөнгө көндә, Аллаға шөкөр, башҡорт рухи мәҙәниәтенең һауаһын һулап йәшәйбеҙ. Өҫтәүенә, мәҙәниәтебеҙ тағы ла киң мәғәнәлә рус әҙәбиәте донъяһына ла сыға. Был да рухландыра. Донъя рухиәте ҡиммәттәрен дә һулайбыҙ. Беҙҙең өсөн Акмулла ла, Пушкин да берҙәй үк ҡәҙерле. Был йәһәттән беҙ күпкә байбыҙ. Башҡорттарҙы әҙ һанлы халыҡ, тиҙәр. Мин быны менән килешмәйем. Әлбиттә, беҙ күп һанлы халыҡ түгел, уртаса һанлыбыҙ. Әйтәйек, һан буйынса Рәсәйҙә дүртенсе торабыҙ икән, был һәйбәт күрһәткес. 143 миллион халыҡ йәшәгән Рәсәйҙә ике миллионға яҡын башҡорт йәшәүе күп яктан ыңғай күренеш. Эргәбеҙҙә йәшәгән урыҫ кешеһе беҙҙең рухи байлыҡҡа көнләшә хатта. Беҙҙең рухи донъябыҙҙан торған ҙур дәүләт кимәлендәге бөтөн яктан үҫешкән мәҙәниәтебеҙ бар. Әҙәбиәтебеҙ, музыкабыҙ, фольклорыбыҙ, аҡыл эйәләребеҙ, батырҙарыбыҙ, тарихыбыҙ бар! Һоҡланғыс күренеш түгелме ни? Өҫтәүенә, беҙ урыҫ мәҙәниәтен дә күңелебеҙгә һеңдереп йәшәйбеҙ - барыһы ла беҙҙеке. Эргәбеҙҙәге башҡорт телен аңламағандар был йәһәттән ниндәйҙер кимәлдә беҙгә ҡарағанда ярлыраҡ. Әле мәктәптәрҙә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡыта башлау киләсәктә башҡа халыҡтарҙың күңелен байыта торған сара ул.

### Икегә бүленеү

Күп йылдар буйы ижадым төрлө тармаҡтарға бүленеп эшләү менән бергә барҙы. Быны, ҡыҙғаныска ҡаршы, ыңғай яғына ҡарағанда, әҙәби ижадты тотҡарлай торған яғы күберәк. Был сараһыҙҙың көнөнән шулай. Ғилми эшкә тотоноп киткәс, күпмелер хеҙмәттәрҙе яҙырмын да, шунан туктап, әҙәби ижадҡа ғына күсермен, тип уйлағайным, ә ул һуҙылды ла һуҙылды, шунан киңәйеүгә табан китте лә барҙы. Ә бер башлағас, башлаған эште тамамларға кәрәк. Берәһен тамамлаһаң, икенсеһе килеп сыға. Ғилми учреждениела эшләгәндә ул бигерәк тә шулай: план буйынса бер эштеңде тамамлап өлгөр-мәйһең, икенсеһе йөкмәтелә. Эш араһында ғына ижад итергә форсат табырға тырышырға тура килә. Ә ысын әҙәби ижад ирекле фекерләүҙе талап итә. Ғалим кеше ирекле фекерләүгә ғилми эшен онотоп торғанда ғына өлгәшә. Онота белмәһәң, ул һәр саҡ һинең башыңда йәшәй.

Ғилми эштең үҙенсәлектәре бар: һәр яңы эштең концепцияларын табырға, баш баҫып эшләргә кәрәк. Быны өсөн бик күп уҡырға, эҙләнергә тура килә. Иң бәхетле ижад - ирекле ижад. Ә ғалимдың эше һәр саҡ үҙе менән бергә. Был әҙәби ижадты ныҡ тотҡарлай торған күренеш. Мәҫәлән, Әнүр Вәхитов ағай 52 йәшендә вафат булып ҡалды. Ул ғүмеренең һуңғы йылдарында докторлыҡ диссертацияһын яҡлап, әҙәби ижадҡа тотонорға хыяллана ине. Уның ҙур күләмле проза әҫәрҙәре яҙырға уйы ла, һәләте лә етерлек булды. Әммә береһе артынан икенсеһе ҡыуа килгән планлы эше, ҡыҙғаныска ҡаршы, ғүмеренең аҙағына тиклем дауам итте һәм ул хыялдарын тормошҡа ашырып өлгөрмәне, бары эш араһында ғына хикәйәләр һәм хикәйәттәрҙән торған бер китабын сығарып өлгөрҙө. Ул әҫәрҙәренең күбеһе йәшерәк ваҡытында яҙылғайны. Шуны беләм: йәшерәк ваҡытта тема-нан-темаға күсеүе еңелерәк, сөнки йәшлек дәрте ярҙам итә. Олоғая бара, башыңда ике-өс тема йәшәй икән, тынғыһыҙлыҡ килә. Пушкиндың: "Живи один. Иди свободною дорогой туда, куда влечет тебя свободный ум", - тигән һүҙҙәре бар. Әҙәбиәттә ижад уңышлы булһын өсөн күп тармаҡлылыҡтан котолоу һәйбәтерәк. Күп тармаҡҡа бүленеп йәшәү йылғаның төрлө тармаҡтарға бүленеп китеүе менән бер - көсө кәмей, төп ағымы һайыға.

Беҙ, фән менән шөғөлләнгәндәр, быны шундай хәлдәбеҙ, ирекле фекерләү өсөн мөмкинлек табып, шул арала нимәлер табып өлгөрәбеҙ. Ә бит түл йыйып та өлгөрөргә кәрәк. Әҙәби ижад менән ғилми ижад тәбиғәте менән икеһе ике төрлө: әҙәби ижад күңелдә яралып өлгөрә торған тылсым, ә ғилми ижад аҡылды, фекерҙе бик тәрәндән аҡтарып сығарыуҙы, бик күп материал туплауҙы, шуны системаға килтереүҙе талап итә. Ғилми эш тә ижад, әммә ул теүәл фәндәргә яҡын шөғөл.

Ә бына әҙәби ижад өсөн фактик материалдың ул тиклем күп булыуы мотлаҡ түгел, уй-хыял аша донъяның әллә ниндәй серҙәрен асырға мөмкин. Шағир фекере донъя кимәлендәге процестарҙан алда бара, алдан һиҙемләй. Шағир фекере, һәр хәлдә, үҙ мөхитенең, үҙ иленең, үҙ милләтенең яҙмышын йөрәге аша үткәрә. Әлбиттә, уға киң белем дә ярҙам итә, ләкин фәндәге кеүек теүәллек талап ителмәй. Бында фекерләү айышы башҡа.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

**Күңелле табындарҙа нимәләрҙән һаҡланырға...**

Ҡунаҡҡа йөрөп һиҙелерлек һимереүҙән һәм ашҡаҙан эшмәкәрлеген боҙоуҙан тыш, йоғошло сирҙәргә лә юлығыу ҡурҡынысы барлығын, моғайын, күптәр белмәйҙер. Ул - үбешеүгә бәйле. Беҙ йыш ҡына ҡунаҡтарҙы ҡаршы алғанда ла, оҙатҡанда ла үпкән булабыҙ. Ә улар араһында ниндәйҙер йоғошло сир менән ауырыусылар булыуы хаҡында уйлап та бирмәйбеҙ.

# Үбешеп...

## сир эләктермә

Ғалимдар үбешкән ваҡытта яҡынса 500 вирус һәм бактерия эләктерергә мөмкин, тип иҫәпләп сығарған. Мәҫәлән, грипп менән ОРВИ сирҙәре һулыш аша ла йоға. Ә бына иң мәкерле сирҙәргә нәк үбешеү аша юлығаһың икән.

Мәҫәлән, кешеләр герпес вирусын эләктереү хәүефенә үтә еңел ҡарай. Ул иң тәүҙә ирендәрҙе зарарлай. Йәштәр уға үҙ белдеге менән төрлө дарыу һөртә лә, герпестың иң ялҡынһынған мәлендә лә, иҫе китмәй, кеше араһында йөрөй. Ҡунакта дөйөм тәрилкәнән салат-фәлән алып ашаныңмы, ике-өс көндән иреңеңдең сәбертеп сығыуын көт тә тор. Иммунитеты көсһеҙ кешеләргә теләһә ниндәй сирҙәр айырыуса тиҙ йоғоусан. Иң ҡурҡынысы, байтаҡ кеше (медиктар әйтеүенсә 98 процент) асыҡтан-асыҡ сирләмәһә лә, герпес вирусын йөрөтә.

Шулай уҡ кешеләр инфекциялы стоматитка ла етди ҡарамай. Урты ялҡынһынып, ҡалынайыңҡырап, ваҡ ҡына яралар барлыҡҡа килһә лә табипка мөрәжәғәт итмәй. Табиптар әйтеүенсә, стоматит үбешкәндә шайыҡтар аша йоға. Шулай уҡ ҡайнар үбешеүҙән тыш дуҫтарса ғына ирендәрҙе тейҙереүҙән дә ангина йоҡтороғға мөмкин. Бәғзе берәүҙәр ангина менән сирләүенә ҡарамаҫтан, температураһы булмаһа, күтәренке кәйефтә ҡунаҡҡа, төрлө кисәләргә йөрөй һәм ундай кеше менән үбешһәң, ауырыуын йоҡторҙом, тиген һүҙ.

**Йәштәр - хәүеф төркөмө**

Инфекциялы мононуклеозды, мәҫәлән, табиптар "йәштәр ауырыуы" тип тә йөрөтә, сөнки ул башлыса 35 йәшкә тиклемгеләрҙе зарарлаусан. Ул организмға шайыҡ аша йоға. Мононуклеозды йоҡтороу өсөн үбешеүҙән тыш, уның менән сирләүсе кешенең стаканынан сәй эсеү йәки тәмәкеһен алып ҡабыу ҙа етә. Ҡапыл температура күтәрелеү, тамаҡ ауыртыу, хәл бөтөү һәм муйындағы лимфатөйөндәрҙең бүртеүе - мононуклеозды йоҡтороуҙың тәүге билдәләре. Һаулығы насар кешеләр икенсе көндә үк ауырый башлай. Был йоғошло сир еңел үтеүенә ҡарамаҫтан, яҡшылап дауаланмаһаң, әҙемтәләре фажиғәле булырға мөмкин, сөнки мононуклеоз вирустары яман шеш барлыҡҡа килтереүгә һәләтле.

**Шик-шөбһәләр тынғы бирмәһә...**

Әгәр партнерыңдың һаулығына шикләнһәң, үбешкәндән һуң тиҙ генә уртты һыу менән сайҡарға кәрәк. Мөмкинселек булғанда һыуға мирамистин, фурацилин, хлорофиллипт кеүек антисептик ҡушып сайкау бигерәк тә яҡшы. Шулай уҡ уртты аҡ араҡы йәки коньяк менән дә дезинфекцияларға мөмкин.

**Хәйер, сир йоҡторам, тип, үбешеүҙән бөтөнләй баш тартырға ла ярамай. Ни өсөн тигәндә, уның шифалы яҡтары ла бар. Мәҫәлән, үбешеү мейене ҡан менән тәьмин итеүҙе яҡшырта, минутына 110 тапҡыр һуғырға мәжбүр итеп, йөрәкте күнектерә һәм ҡанға "бәхет гормондары" тарата. Билдәле булыуынса, мөхәббәттән иҫергән күтәренке кәйефле кешеләргә ауырыу йоға һалып бармай.**

...ҠОЛАҒЫНА

# ИРҘӘРҘЕҢ... ЙӨРӘГЕ

## гүзәл заттарҙың түше "көсһөҙ"

**Ир-ат менән ҡатын-ҡыҙҙар бер ваҡытта ла бер иш ауырымай. Был уларҙың психологияһы һәм организмы эшмәкәрлеге төрлөсә булыуынан да киләләр. Был төрлөлөк түбәндәгеләрҙән ғибәрәт.**

### Ҡатын-ҡыҙ гормоны инфаркттан һаҡлай

Ирҙәрҙең ҡаны, мәҫәлән, гүзәл заттарҙыкына ҡарағанда 10 процентка ҡуйыраҡ. Был уларҙың ҡан тамырҙарында төйөрҙәр барлыҡҡа килтерә.

Ҡатын-ҡыҙҙар йөрәге, дәүмәле менән көслө заттарҙыкынан бәләкәй булыу сәбәпле, йышыраҡ тибә. Мәҫәлән, ирҙәрҙең йөрәге минутына 60-70, ә ҡатын-ҡыҙҙыҡы 80-90 тапҡыр һуға.



Инфаркт, инсульт көслө зат вәкилдәрен башлыса 40-45 йәштәрҙә аяҡтан йыҡыусан. Был сирҙәрҙән бигерәк тә енси яктан үтә дәртле һәм агрессив холокло ир-ат яфалана. Ә тәбиғәте менән тыныс, эшкә ығыш ир-ат һау йөрәкле була. Йөрәктең сәләмәтлеге организмдағы гормондар төрлөлөгөнә лә бәйле. Ҡатын-ҡыҙҙың ҡан тамырҙары торошон эстроген гормоны һаҡлай. Эстроген ни тиклем күп булһа, гүзәл заттың ҡан тамырҙары ла шул тиклем һығылмалыраҡ, һәм ул атеросклероз сирен булдырмай. Тик олоғая килә генә, организмдың эстрогенды аҙ миҡдарҙа эшкәртеүе арҡаһында, ҡан тамырҙарының һығылмалығы юғала һәм ундағы ваҡ капиллярҙар аҙ нескәрә төшә.

Әгәр ирҙәр йәшләй инфаркт кисереүгә биреүсән булһа, ҡатын-ҡыҙҙарҙың "инфаркт осоро" 60-65 йәштән һуң ғына башлана. Был йәшкә тиклем гүзәл заттар гипертония, шәкәр диабеты һәм гинекологияға ҡағылышлы ауырыуҙар үткәрһә, инфаркты ауыр кисерә, йыш осракта күтәрә лә алмай.

Американың Сәләмәтлек ассоциацияһы мәғлүмәттәре буйынса, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан үлеүселәр араһында гүзәл заттар 54 процент тәшкил итә.

### Ир-егеттәр тиҙерәк "туҙа"...

Ҡатын-ҡыҙ мейеһенең ауырлығы ирҙәрҙекенән 12 процентка кәмерәк булһа ла, ҡан менән тәьмин итеү эшмәкәрлеге 1,3 тапҡырға етеҙерәк. Пенсильвания университеты ғалимдары 18-ҙән 80 йәшкә тиклемге 200 ир-егеткә томограф



тикшереүе үткәреп, көслө заттың мейе туҡымалары ҡатын-ҡыҙҙарҙыкына ҡарағанда 1,5-2 тапҡырға тиҙерәк туҙыуын асыҡлай. Бигерәк тә телмәр өсөн яуаплы һул ярымшарҙа үҙгәрештәр йыш осрай.

Ғөмүмән, ир-егеттәрҙең мейеһе организмдағы ышаныслы механизм булып һаналмай. Ҡатын-ҡыҙ мейеһе бүлектәре үҙе аша ҡанды 15 процентка күберәк үткәрә. Инфаркт һәм Альцгеймер менән башлыса ир-аттың сирләүе лә, бәлки, шуға бәйләлер. 45 йәштән һуң мейенең нейрон тип аталған н е р в күҙәнәктәренең яңырып тороуы 1,5 тапҡырға һүлпәнәйеүе һөҙөмтәһендә лә ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙан алдараҡ аҡыл һайығыуға дусар була.

### Ҡайһы сирҙәр енес һайлай?

Һөт биҙҙәре ауырыуы фәҡәт ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас сир тип иҫәпләнә. Күптәр түштә яман шеш барлыҡҡа килеүенән ҡурҡып йәшәй. Бактинәң, ирҙәр ҙә түш биҙҙәре шешеп ауырый, хатта яман шеш барлыҡҡа килеүе лә ихтимал икән. Йәҙ мең ир-егеттән ике-өс кешенең түш биҙе туҡымаларында зарарһыҙ шеш хасил булған осрактар теркәлеп барыуы ла

шуға дәлилдер. Ул матдәләр алмашыныу боҙолоуының әҙемтәһе булыуы мөмкин. Сөнки ир-ат олоғая барған һайын организмы матдәләр алмашыуын көйләүсе тестостерон тиген гормондарҙы аҙ миҡдарҙа эшләп сығара.

Ҡолаҡ арты биҙенең шешеүе ҡыҙ бала һаулығы өсөн әҙемтәһеҙ үтһә лә, ул ир балаларҙы түлһеҙ ҡалдырыуы мөмкин. Ҡыҙылсаның иһә ир-егеттәргә түгел, ә ҡатын-ҡыҙҙар өсөн зарары ҙур. Мәҫәлән, йөклө сакта ҡыҙылса менән ауырыған ҡатындарҙан 50 проценты осрағында сабыйҙар ет-



лекмәй тыуа.

Шулай уҡ һейҙәк ҡыуығы ялҡынһыныуы менән гүзәл зат ирҙәргә ҡарағанда өс тапҡырға күберәк ауырый. Һейҙәк ҡыуығына инфекция йыш эләгеүе уларҙың әлеге лә баяғы организм төҙөлөшө үҙенсәлегенә бәйле.

### Уретрит иһә - ирҙәр проблемаһы.

Остеопороз менән башлыса ҡатын-ҡыҙҙар климакс ваҡытында ауырый, сөнки был мәлдә уларҙың организмы кальций өсөн яуаплы эстроген гормондарын аҙ эшкәртә башлау сәбәпле, һөйәктәр муртка әйләнә.

### Янбаштағы май кемгә файҙалы?

Ҡатын-ҡыҙ бер нисек тә целлюлиттан ҡаса алмай. Был улар өсөн тәбиғи физиологик күренеш. Ә бына ир-ат "әфлисун тиреле"гә әйләнеп, янбашына "май ултырып" һимереүҙән кәүҙәһе ҡатын-ҡыҙҙар кәүҙәһенә оҡшай башлаһа, был уның эндокрин системаһында тайпылыштар булыуын аңлата. Тимәк, кисектермәй табипка күренеп, ашҡаҙан аҫты һәм ҡалҡан биҙҙәре эшмәкәрлеген тикшертергә кәрәк.

Ир-егет кәүҙәһенең йөнтәҫлегенә борсолорға тейеш түгел. Был улар өсөн нормаль күренеш, ул хатта ир-атка мыҡты төҫ бирә. Ә бына гүзәл заттарҙың кәүҙәһе сәс менән ҡапланһа, был уның организмы тестостерон тиген ирҙәр гормонын күпләп етештереүгә бәйле. Был күренеш шулай уҡ гүзәл заттарҙың гормональ препараттар менән яңылыш дауаланыуы һөҙөмтәһе лә булырға мөмкин.

МӘҠӘЛДӘРҘӘ – ХАЛЫҠ АҠЫЛЫ

# Күңел һуҡырлығы насар

**"Күҙе һуҡырҙан ҡурҡма, күңеле һуҡырҙан ҡурҡ"**

Кешенең күңел донъяһынан да ҡатмарлыраҡ нәмә юҡ. Тәңре - Алла күңел донъяһын шул тиклем ҡатмарлы, серле итеп яратҡан - уны бер ваҡытта ла аңлап та, өйрәнеп тә, белеп тә бөтөп булмаясаҡ. Күңел - ул тойғолар донъяһы. Ә тойғоно тотоп та, ҡапшап та, күреп тә булмай, шуның өсөн дә ғәжәп серҙәр һаҡлай ул. Әммә шулай ҙа һәр кеше тойоу, һиҙеү, һиҙемләү, аңғарыу тиген төшөнсәләргә эйә. Кешенең күҙ ҡарашынан, ишара-хәрәкәтенән, хатта атлап китеүенән, тын алышынан байтаҡ кисерештәрен тойоп була. Бигерәк тә күҙҙәр алдамай. Кеше эске тойғоларын ни тиклем генә йәшерергә теләһә лә уның ҡарашы барыһын да һиҙҙертә. Шуның өсөн "Күҙ - күңелдең көҙгөһө" тигәндәр ҙә инде. Ә "күңеле һуҡыр" тип, бар нәмәгә битараф, вайымһыҙ, бер нәмәлә лә эше булмаған, донъяла Никтыуҙы булып йәшәгән кешегә әйтәләр. Ундайҙар маҡсатһыҙ йәки бәләкәй генә, үҙенә генә ҡағылған маҡсат менән йәшәйҙәр. Ундай кешеләргә ҡарата халыҡта тағы "Күҙе һүнгәндең өмөтө һүнгән" тип тә әйтәләр. "Дәртһеҙгә дауа юҡ" тиген мәҡәл дә бар. Дәртһеҙ кешe үҙен үҙе ауырыуға һабыштыра. Дәрт һүнеүҙән башланған ауырыуҙы, ысынлап та, дауалауы ауыр.

Баланың күңелен һуҡыр итмәҫ өсөн бәләкәйҙән маҡсатлы итеп үҫтерергә кәрәк. Маҡсатлы итеп үҫтереүҙең төп ғилләһе - баланы тыуған теленән һәм халҡынан айырмауҙа. Халҡынан айырылмаған бала уның яҙмышы менән бергә йәшәй һәм алдына һәр ваҡыт оло маҡсаттар ҡуя. Ә "халҡым" тиген оло маҡсат башҡа бөтөн ваҡ-төйәк ығы-зығыларҙан да өҫтөн һәм бер ваҡытта ла өмөтһеҙләккә - күңел һүнеүенә килтермәйәсәк.

Мәрйәм БУРАҠАЕВА.

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП

# ХӘКИКӘТТЕҢ

## өлөшө генә



**Башҡорттоң "Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла", тигән мәҡәле бар. Тураһын әйтеп туғаныңа ярамағанда кинәйәләп әйтеү, берәй фәһемле ваҡиға йә тарих һөйләү, ишаралау күпкә отошло.**

Гәзитебеҙҙең алдағы ике һанында "Ғалим һәм дәйә ҡыуыусы", "Табиб бәйғәмбәрҙән айырыламы?" кинәйәләрен баҫтырҙыҡ. Уларҙың йөкмәткеһен, кинәйәнен һәр кем үҙенсә аңлағандыр, үҙенсә ҡабул иткәндер. Бер төрлө аңларға, йөҙ проценты менән бер иш ҡабул итергә беҙ бит биороботтар түгел - бер-беребеҙгә шул тиклем окшаш заттарбыҙ һәм шул тиклем үҙенсәлеклебеҙ, сөнки тәбиғәтебеҙ шулай ҡуша, күңелебеҙ шулай теләй. Кинәйәләрҙең тағы бер отошло яғы шунда: улар бер кемгә лә көсләп тағылмай, әхлаҡи ҡанун кеүек тә ҡабул ителмәй - укыйһаң да, укымаһаң да, фәһем алһаң-алмаһаң да – үҙ ихтыярыңда.

Яңы кинәйә тәҡдим итәбеҙ. Тәүге икеһе кеүек, ул да дини темаға бәйле. Шаңдау-яуаптар килеүенә өмөт итәбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП, РИУӘЙӘТ!**

**Мөхәммәт бәйғәмбәр юлдашы менән бер ҡалаға дини тәғлимәткә өндәргә килгән. Ислам дине яҡлы бер кеше уға былай тип өндәшкән: "Әфәндем! Был ҡалалағы алйотлоҡто бөтөрөп булмай. Бындағы кешеләр шул тиклем тиҫкәре, уларҙы бер нәмәгә лә өйрәтеп булмай. Һин дә был йәнһеҙ әҙәм заттарын дөрөҫ юлға баҫтыра алмаҫһың".**

**Бәйғәмбәр уны тыныс ҡына тыңлаған да: "Һин дөрөҫ әйтәһең", - тигән.**

**Тиҙҙән бәйғәмбәр янына шат йылмайып, икенсе бер кеше килгән. "Әфәндем! Һин иң бәхетле ҡалаға килдең. Бындағы кешеләр һинең ғәҙел тәғлимәтеңде тыңларға һәм һәр һүҙеңде күңеленә уйырға ынтылып тора", - тигән ул. "Һин дөрөҫ әйтәһең", - тигән бәйғәмбәр, илтифатлы йылмайып.**

**"О, әфәндем! - тип ҡысҡырып ебәргән бәйғәмбәрҙең юлдашы. - Һин ҡапма-ҡаршы фекерле кешеләрҙең икеһенә лә бер төрлө яуап бирҙең. Аҡты ҡара тип әйтеп булмай ҙа инде".**

**"Һәр кем донъяны нисек теләй, шулай күрә. Ниңә мин уларға ҡаршы килергә тейеш? Уларҙың береһе яуызлыкты күрә, икенсеһе - изгелекте. Һин үҙең, икеһенең береһе яңылыш әйтте, тип раҫлай алаһыңмы? Бөтөн донъялағы кеүек, бындағы кешеләр ҙә яуыздарға һәм изге күңелләргә бүленә. Әлеге икеүҙең береһе лә яңылыш һөйләмәне, бары тик тулы булмаған хәкикәтте әйтте", - тип яуап биргән бәйғәмбәр.**

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ**
**әҙерләне.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# Күңел тыныслығы һаҡла...

**✦Ни өсөндөр, күптәр яулаған уңышына ҡәнәғәтлек кисереп ҡыуана белмәй. Ниндәйҙер маҡсаты ғәмәлгә аштымы, шунда уҡ икенсеһен хәстәрләргә тотона. Ә һин, зинһар өсөн, улай итмә! Ҡайһы бер эшҡыуарҙар, бүтәндәр үҙҙәренең үксәһенә баҫып килә, тип уйлап, көнө-төнө тигәндәй, ал-ял белмәй эшләп, нервылар көсөргәнешлегенән йөрәге ауыртып, дауаханаға ятырға мәжбүр була. Ғәмәлдә иһә, бер кем дә уның менән ярышмай, еңеү яулауҙа уҙырға ла тырышмай, ә һәр кеше үҙ яйына эшләүен дауам итә.**

✦Тырышып эшләргә кәрәк, әлбиттә, егәрле кеше ҡайҙа ла хөрмәтле. Ләкин эштең йәмен, ҡәҙерен белеү бәләкәй генә уңышка ла ҡыуаныу фарыз. Юғиһә, иң елле, ҙур суммалы килем артынан ҡыуам, тип, һин иң ҡиммәтле сифатыңды - күңел һиллегеңде, йән тыныслығыңды юғалтасаҡһың. Шуның өсөн барына риза, ҡәнәғәт булырға өйрән.

✦Әгәр яраткан һөнәреңә эйә булһаң, үҙеңде иркен тойоп йәшәргә мөмкинлек биргән эш хаҡың, фатирың булһа - былар үҙе үк ҙур еңеү бит. Ни өсөн тигәндә, барыһын да хәләл көсөң менән тапҡанһың. Былар өсөн Аллаһы Тәғәләгә һәм үҙеңә һәр саҡ рәхмәт әйт.

✦Йәнең тыныс булып, күңелеңдә һиллек, гармония урынлашһа, эштәрең яҡшы барыр. Күңел тыныс булғанда, матди юғалтыуҙар ҙа еңел кисерелә. Һин бит көслө рухлы, башҡаларҙан рухи ярҙам күрһәтергә лә ҡулыңдан килә.

✦"Минең бөтә нәмәм дә бар һәм буласаҡ", тип ҡабатларға онотма. Кемдеңдер юҡ-бар һөйләп, кәйефеңде төшөрөүенә юл ҡуйма, күңел тыныслығыңды һаҡла. Бар эшкә лә тыныс күңел, ышаныс менән тотонһаң - уңырһың.

✦Хыялды тормошка ашырыу теләге көслө булғанда, буласаҡ еңеүҙе күҙ алдына килтереп, күңел дә елкенә һәм тиҙ үк еңеү ҙә килә. Шуның өсөн ҡанда адреналинды арттырырлык кимәлдә көслө ыңғай кисереш тыуҙырырҙай теләнә ниндәй хәлде файҙаланырға кәрәк. Мәҫәлән, үҙүҙеңә оло еңеүҙәр яуларға теләп, текә, бейек тауҙан саңғыла аҫҡа табан ел. Диңгеҙҙә һыу ингәндә лә, һыуға салҡан ятып төнһеҙ йыһанға баҡ та: "Мин миллионер, бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәйем!" - тип ҡысҡыр. Йә булмаһа, "О, батшаларҙың батшаһы,бөтөн донъя хакимы, яктыларҙан яҡты Йыһан!

✦Мин һинең ҡыҙың! Вариҫың! Арттыр минең байлыкты!" тип ҡысҡырып һора.

**✦ Ышан, был хыялдарыңдың тормошка ашыр мәлдәрен яҡынайтасаҡ. Саңғыла елешләй ҡысҡырып теләктәр әйткәндә, мәҫәлән, башҡаларҙың һиңә ғәжәпләнеп ҡарауына тартынма. Ҡытай халҡының "Аҡыллы менән алйотто айырып булмай, сөнки уларҙың булмышы оҡшаш", тигән мәҡәлен онотма. Сәйер ҡылыҡлы тип уйлаһындар, әйҙә, һинең өсөн иң мөһиме - яҡшы һөҙөмтә алыу.**

ҺЫНАМЫШ




**Психологияла ошо һорауға яуап бирә торған тест бар. Яуаптарҙы тикшереп, теге йәки был кеше тураһында тәүге һығымта яһап була. Һорау тәү карамаҡҡа бик ябай күренһә лә, һөҙөмтәләр бер-береһенән ҡырка айырыла. Бөтөн ғилләә шунда: "Мин кем?" тигән бер үк һорауға тиҫтәнән ашыу бер-береһен ҡабатламаған яуап бирергә кәрәк. Тест үткәргән ваҡытта күптәр бер нисә яуапты тиҙ генә яҙа ла, туктап ҡала. Күрәһең, беҙ үҙебеҙҙең кемлегебеҙ тураһында уйлана һалып бармайбыҙ.**

Һәр кешелә тәбиғәт тарафынан бирелгән шартлы һәм шартһыҙ инстинкттар бар. Был сифат беҙгә ҡан аша, йәғни гендар аша күсә. Йәшәү барышында инстинкттарға ғәҙәттәр өҫтәлә һәм нығына. "Ауырыу китһә лә, ғәҙәт китмәй", тиеүебеҙ юҡҡа түгел. Был сифаттарынан тыш кешелә аҡыл һәм интуиция бар. Беҙ аҡылға таянып йәшәйбеҙ, әле бер кем дә башҡалар ишетерлек итеп: "Минең аҡылым юҡ", - тип ҡысҡырып йөрөгәне юҡ. Ә бына интуицияны дөрөҫ аңлау өсөн уны мәғәнәһе яғынан яҡын булған намыҫ, выждан төшөнсәләре менән алмаштырайыҡ. Кешенең холоҡ-фиғеләндә ҡайһы сифат (инстинкт, ғәҙәт, аҡыл, намыҫ) көслөрәк булыуына ҡарап, уның психикаһын дүрт төргә бүлеп ҡарарға була. Әгәр ҙә кеше аҡылы намыҫты инкар итеп, инстинкт буйынса ғына йәшәһә, ул - кеше сүрәтендәге хайуан кимәлендә: ашай-эсә, йоҡлай, гөмүмән, физик көсөнән килгәндә ҡылана. Теләй икән, ҡатын-ҡыҙҙы көсләй, теләй икән, үҙенән көсһеҙҙе үлтерә. Ябай итеп уны хайуандарға хас психика тип атарға була.

Әгәр ҙә кеше аҡылы намыҫты инкар итеп, нығынған ғәҙәттәр ҡоршауында йәшәһә, ул - зомби: иртән ваҡытында тора, тешен таҙарта, көндө алдан билдәләнгән программа буйынса үткәрә, кис ятып йоҡлай. Ул алдан үҙе билдәләгән, йәки башҡалар мәжбүр иткән, рельс кеүек, ситкә сығып булмай торған юлдан тайпылмай йәшәй. Ябай ауыл көтөүсеһе лә, юғары белемле фән докторы ла зомбиға әйләнеү ҡурҡынысынан азат түгел.

Әгәр ҙә кеше аҡыл аша инстинкттары, ғәҙәттәре менән оҫта идара итә белеп тә, намыҫты инкар итһә, ул - иблескә тартым зат. Ундайҙар аҡыллы, ихтыярлы булыуы менән ләззәтләнә, үҙен башҡаларҙан өҫтөн ҡуя.

Әгәр ҙә кеше инстинкттары, ғәҙәттәре менән оҫта идара итә белһә һәм, аҡылға ғына таянмайынса, намыҫ ҡушыуы буйынса йәшәһә, ул камил була.

Ошоларҙан сығып, кешегә дүрт төрлө психик һаләт хас тип әйтергә була: 1) кешелекле; 2) иблескә тартым; 3) зомби; 4) хайуандарса.

Психик һәләттең бишенсе төрө лә бар: ул- хайуан кимәләнән дә түбән төшөүсе. Алкоголиктарҙы һәм наркомандарҙы башҡаса атап та булмай, хайуандар, уларға ҡарағанда, күпкә "аҡыллырак".

Ошондай бүленеш менән ылыҡкһандәр үҙ-үҙегеҙгә: "Мин кем?" - тигән һорау бирегеҙ. Яуап биргәс, яҡынтирәгеҙҙәгеләргә өстән генә: "Ул кем?" - тигән һорау бирегеҙ һәм яуап әҙләгеҙ. Яуапты дөрөҫ тапһағыҙ, йәмғиәтебеҙҙә кемдәр өҫтөнлөк иткәнен аңларға һәм: "Беҙ кем?" тигән һорауға яуап табып була.

**Хөснөтдин ШӘЙХИН.**

# ИРЕКЛЕ ФЕКЕР

## иректә тыуа

### Бәхет күңел ярып килә

Йәш ваҡытта шиғырҙар миңә көтөлмәгән тойғо һымаҡ килә торғайны. Башта уны тойғо буларак тояһың. Баҡтиһәң, ул фекер икән. Тимәк, тойғо фекерҙе тыуҙыра. Себеш мороно менән йомортҡа ҡабығын тишеп сыҡкандай, тойғо, фекер булып, тышҡа бәреп сыға һәм үҙенә кәрәкле һүҙҙәрҙе таба. Ҡайһы берҙә шиғыр бер фраза ғына булып тыуа. Мин ул фразаны ҡағыҙға теркәп ҡуям да, онотам. Аҙаҡ шул яҙыу күҙгә эләккәс, мин уны шиғыр итеп яҙып ҡуям. Шиғыр күңелдә тыумаһа, уны уйлап сығарып булмай. Күңелгә ятҡан берәй китап уҡып ултырғанда ла тыуып ҡуя ул. Тәбиғәт ҡосағында йөрөгәндә шиғыр образ булып яралыусан. Ҡасандыр ишеткән тарих, йә яҙмыш та шиғри әҫәргә әйләнә. Мәҫәлән, минең "Алтын сылбырлы бөркөт" тигән хикәйәтем бар. Уның тарихы былай. Благовар районының Баш Тирмә ауылында Кинйәбай Ибраһимов тигән ағай 70-се йылдарҙа бер легенда һөйләгәйне. Элекке заманда батша һарайына Башҡортостандан бөркөт һоратҡандар. Баш Тирмә ауылының Баттал исемле бөркөтсөһө бер бөркөттө тотоп ебәргән. Ғөмүмән, ул осорҙа беҙҙә бөркөтсөлөк нык үҫешкән булған һәм батша һарайындағы күп кенә бөркөттәрҙең исеме лә башҡортса булған. Бының турала Николай Константинович Дмитриев яҙып та ҡалдырған. "Башкирские названия птиц в соколятнике царя Алексей Михайловича" тип атала ул мәҡәлә. Баттал тотоп ебәргән бөркөт батша һарайынан ҡасып, Баш Тирмә ауылы эргәһендәге урманға ҡайтып үлгән. Был бит тетрәндергес тарих. Шул турала яҙып ҡуйғанмын да, онотҡанмын. Бер көн шул хәтирә яҙмаларым араһынан килеп сыҡты һәм тормошобоҙ, яҙмышыбыҙ менән бәйле тарих әҫәр булып яңынан тыуҙы. Башта тәүге һүҙҙәре яҙылды, аҙаҡ шиғыр булып үҫеште. Ҡоштоң да тыуған ере бар. Алтын сылбырын өҙөп, һарай тәҙрәһен ватып, тыуған яғына ҡайтҡан. Был ҡош яҙмышы тураһында хатта йыры ла булған, тигәйне Кинйәбай ағай.

### Азатлыҡ - теләгәнде әйтә белеү

Йәш ижадсыларға теләгем һәм кәңәшем шул: ваҡыттың, һаулыҡтың, тормоштоң ҡәҙерен белергә кәрәк. Ваҡытты бушҡа әрәм итмәйек, һаулығыбыҙға зыян килтермәйек, үҙебеҙҙе үҙебеҙ хәстәрләп йәшәйек. Шул ваҡытта ижад та емешлерәк булыр. Әгәр ҙә ғилми эштәремде кәметһәм, үҙем теләгән китаптарҙы ғына уҡып йәшәһәм, үҙем теләгәнсә генә театрҙарға йөрөһәм, тәбиғәткә сығыуға ваҡыт тапһам, йыйылған тәьҫораттарым әҫәрҙәремә күсһә, теләгәнде яҙһам, минән дә бәхетле һәм ирекле фекерләүсе булмаҫ ине. Әҙәбиәттә теләп тә әйтеп бөтөрә алмаған нәмәләр булыуы күңелде ҡыра. Һис юғы, теләгәнде мөмкин булған тиклем әйтергә кәрәк. Буш героизм менән шөғөлләнеп булмай, уны урынына еткереп әйтә, аңғарта белергә кәрәк: ул кинәйә булһынмы, башҡаһымы - сәпкә тейергә тейеш. Сикләнмәгән азатлыҡ юҡтыр ул. Бының өсөн бер кемде лә ғәйепләп булмай. Азатлыҡ - ул теләгәненде әйтә белеү.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Туған телдең ҡәҙерен белеп, үҙ телендә иркен һөйләшкән, иң мөһиме, тел нескәлектәрен тулыһынса күңеленә һеңдереп, уй-фекерен урынына еткереп әйтә белгән зыялыларыбыҙ һирәк. Йәнле һөйләш - йән дарыуы. Рәшит Закир улы Шәкуров менән һөйләшкәндә йәнле һөйләш менән фекер тәрәнлегенең бергә үрелеп килеүе, ысынлап та, күңелгә май булып яғыла, аңды уята.**

# Илаһи моң милләтемдең күҙҙәрендә

**Рәшит ШӘКҮР**

### Бәйгеләргә сыҡтым

***Ижад майҙанында ярыш бара,***
***Бер минутка булмай туҡталып.***
***Бәйгеләрҙә мин дә ат өҫтөндә***
***Еләм, сабам, алға уҡталып.***

***Атым минең, толпар затым минең,***
***Ынтыл әле, ынтыл, йән дуҫым.***
***Беҙ етәһе үрҙәр алда әле,***
***Барҙыр унда, барҙыр ырыҫ моң.***

***Аҡ көндәрҙә, ҡара төндәрҙә лә***
***Янып торһон өмөт йондоҙо.***
***Ҡанатланып ос һин, толпар атым,***
***Ара алыҫ, алда юл оҙон.***

****

***Башҡортто мин күреп торам күҙҙәренән -***
***Илаһи моң милләтемдең күҙҙәрендә.***
***Бер ҡарауҙан абайлайым йөҙҙәренән -***
***Ҡояш нуры милләтемдең йөҙҙәрендә.***

***Ә шулай ҙа, башҡортлоҡ ул - оло бер сер.***
***Иманһыҙҙар, намыҫһыҙҙар башҡорт түгел.***
***Уралҡайҙың ҡотон һаҡлап, башҡорттарым***
***Быуаттарҙан быуаттарға балҡып торор.***

****

***Бәйгеләрҙә аты уҙмаһа ла,***
***Еңеп сыҡмаһа ла майҙанда,***
***Бәғзеләр бит дан һәм нан тигәндә***
***Килеп етә әллә ҡайҙарҙан.***

***Ҡайҙа хәҙер күкрәк көсө менән***
***Майҙан алыу, майҙан тотоуҙар?***
***Ысын батырҙарса көс һынашыу,***
***Отолоуҙар йәки отоуҙар***

****

***Ялан ерҙә йылғаларҙың ағыштары -***
***Донъяларҙың ниндәй хисе, һағыштары?..***
***Ниндәй уйҙар сайҡалышып ярға ҡаға,***
***Сал тулҡындар сабышалар ҡайҙа табан?..***

***Далаларҙа дарьяларҙың алҡыныуы -***
***Хыялдарҙың ниндәй көсө, талпыныуы?..***
***Ерем, һиндә ағып ятҡан һыуҙар менән***
***Минең дә бит йәнем, тәнем һуғарылған.***

****

***Эй ғүмерҙәр... - аҡҡан һыу ғына,***
***Беҙ аңлайбыҙ быны һуң ғына.***
***Тек-тек, ана, тек-тек тама секундтар,***
***Секундтарҙы йыя минуттар.***
***Аға һыуҙар, аға туктамай,***
***Ваҡыт арғымағы йоҡламай.***

****

***Иҫкә төшә иҫке заман ғәҙәттәре,***
***Атайҙарҙың тәртиптәре, әҙәптәре.***
***Иҫкергән, тип, сығарып уҡ ташламайыҡ***
***Стенала торған алтын сәғәттәрҙе.***

****

***Ағын һыуҙың аҫтан аҡҡан ағымдары... -***
***Кемдәр генә күргән икән, белгән икән...***
***Ә тормоштоң мәкерлеген белмәгәндәр***
***Аҫтан аҡҡан ағымдарҙан бөлгән икән.***

****

***Тормошто мин оҡшатамын әкиәткә,***
***Әкиәттә мәңге хәҡиҡәткә:***
***Изгелектең баһаһы ҙур халыҡ өсөн,***
***Изгелек ҡыл ер, һыу һәм дә балыҡ өсөн.***

****

***Уйға сумып йөрөүеңдән ни фәтеүә,***
***Уйҙарыңды уйып һала белмәгәс?***
***Тәуарихты күп белеүҙән ни фәтеүә,***
***Үткәндәрҙән һабаҡ ала белмәгәс?***

## АҠЫЛ – ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# Иргәйелдәр араһында... бәһлеүән булыу еңел

Хаталар алдында ишекте ябып ҡуябыҙ ҙа ул... тик артабан хәҡиҡәтте нисек танырға һуң?

**(Рабиндранат Тагор, 1861-1941 йй.).**

Хөкөм итеү насарлыҡ эшләү теләген һүрелтмәй, ә иң яҡшы осраҡта кеше бынан һуң хөкөмдән ҡасырға ғына өйрәнә.

**(Т. Питерс).**

Һәр эштә уңыштың 80 проценты етәксенән, ҡалған 20 проценты ғына уның ҡул аҫтында эшләүселәрҙән тора.

**(Менеджмент профессоры фекере).**

Үҙ өмөттәрең менән һаҡ бул: яҙмыш ҡуласаһы яуыз, төрлө боролоштар булырға мөмкин.

**( Хусрави, төркмән шағиры, X быуат).**

Система тотороҡло булһын өсөн, уны йыш ҡына һелкетеп торорға кәрәк.

**(В. Челомей, академик).**

Ҡош хоҡуғы менән әллә ни алыҫ осоп булмай.

**(Билдәһеҙ автор).**

Етәкселәр йәшкә һәм ҡартҡа түгел, ә аҡыллыға һәм ахмаҡҡа бүленә.

Ябыҡ ауыҙ тештәрҙе һаҡларға ярҙам итә.Кешене тикшерергә теләһәң, уға власть тоттор.

Тирә-яғыңда иргәйелдәр генә йыйылғанда, бәһлеүән булыу еңел ул.

**(Билдәһеҙ автор).**

Әгәр һин бер көндән дә артыҡ бәхетле икән, тимәк һинән ниҙер йәшерәләр.

Артыҡ күп ҡабатланған фекер үҙ көсөн юғалтырға ла мөмкин.

**(Андре Моруа).**

Ахмаҡ бер ваҡытта ла көрсөккә инмәй, сөнки ул аҡыллылар менән тулған.

Әгәр ҙә ағас һиңә үҙенең күләгәһен, сәскәһен һәм емештәрен тәҡдим итә икән, рәхмәт йөҙөнән уны ерҙән ҡаҙып алып, үҙең менән алып китергә теләрһеңме икән?.

**(Васиштха, һинд яҙыусыһы).**

Һин үҙең уйлаған хаҡында әйтмәҫкә лә мөмкинһең, ләкин был һин үҙең уйламаған нәмә хаҡында әйтергә тейешһең, тигәнде аңлатмай: тәүге осраҡ - аҡыллылыҡ, икенсеһе - икейөҙлөлөк.

**(В. Либкнехт).**

Тәнҡит хат ташыусы күгәрсен һымаҡ: ул һәр ваҡыт яңынан үҙеңә әйләнеп ҡайта.

**(Дейл Карнеги).**

**Шулай итеп, риүәйәт: "Бер музыкант 20 йәшендә һис икеләнеүһеҙ: "Был донъяла бары мин генә!" тип ҡабатлар булған. 25 йәштә иһә ул һағыраҡ ҡыланған: "Был донъяла мин һәм... Моцарт ҡына!" тигән. 30 йәштә иһә уның һүҙҙәре аҡыллыраҡ яңғыраған: "Моцарт һәм... мин!". Башына тамам аҡыл ингәс кенә ул: "Был донъяла бары Моцарт ҡына!" тигән һығымта яһаған".**

**«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:**
Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте
«Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәррирләт:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТҠУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru
«Киске Өфө»нөң индексы – 50665.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте, **53-25-44, 72-89-09, 73-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә **53-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №7 –1675.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды,
(450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

Тиражы - 6121
Заказ 371